*Клара ХӘМИҘУЛЛИНА*

# Ҡаҙанфәр бейгә ҡағылышлы тарихнамәләр

*Хөрмәтле уҡытыусыбыҙ Әнүәр ағай Әсфәндиәровтың яҡты иҫтәлегенә бағышлана*

Мендәрҙең күренекле бейе Ҡаҙанфәр тоҡомдары 1671 йылда ер тәғәйенләү ҡағыҙҙарында теркәлә. Уларҙың биләмәләре, тимәк, тарихтары ла Ҡаҙанфәр исеме менән бәйләнгән. З.Вәлиди уны Газанфер тип атай. Әммә был исем ниндәйҙер сәбәптәр менән Ҡәнзәфәргә әйләнеп киткән. Ул урыҫ телендә ошондай шәкелдә документтарға инеп киткәнме, йә булмаһа был исем Хан Зөфәр исеменең боҙолған шәкелеме, нисек кенә булмаһын, ошо әхүәл был шәхестең тарихнамәһен тергеҙеүҙе, һис шикһеҙ, тотҡарлаған. Мин уны Пугачев заманындағы Ҡәнзәфәр Усаев менән бутаған кешеләрҙең яҙмаларын уҡығаным булды. Благовар ҡасабаһында ла хәтер ташы Ҡәнзәфәр бейгә ҡуйылған.

Беҙҙең көндәрҙә осрамаған Ҡаҙанфәр исеменең яңғырашы ҡолаҡҡа ят һымаҡ тойола һәм берәй исемдең боҙолған яҙылышы һымаҡ күренә. Ысынбарлыҡта был исем оло мәғәнә һаҡлай һәм был атаманы йөрөткән кешенең дәрәжәһе лә, тамыры ла киң билдәле булған, әлбиттә.

Ҡуш исемдең тәүге өлөшө — "Ҡаҙан" һүҙе аңлашылған һымаҡ. Әммә боронғо башҡорт был һүҙҙе икенсе мәғәнә менән ҡулланмағанмы икән? Берҡаҙан атамаһы ла ошондай һүҙбәйләнешкә инеп китеүе мөмкин бит, сөнки соҡорло, тәрән батҡылыҡтарҙы ла, уйһыу ерҙәрҙе лә олатайҙарыбыҙ ҡаҙан тип йөрөткән. Шәжәрәләрҙә килтерелгән: "...однажды в промерзшем месте в огромном казане нашли ребенка" тигән мәғлүмәт бөтөнләй икенсе мәғәнә йөрөтөүе мөмкин. "Иҙеүкәй һәм Мораҙым" иртәгендә Мораҙымдың да тыуыу хәбәре ошондай урын менән бәйле — ул Иҙеүкәйҙең балаһы, бер урында ҡол ҡатын, икенсе вариантта Сытмырҙың ҡатындарының береһе Ғәнәкәнән (Хәнәкә шәкеле лә бар) никахһыҙ тыуған бала тип бирелә. Баланы Ғәнәкә ҡуйы ҡамышлыҡта таба: "...Һис бер кеше инмәҫтәй, кеше күҙе күрмәҫтәй, тирә-яғы һелкенеп, баҡалары эркелеп, убып торған Һаҙлыҡҡа Ғәнәкә барып ятты, ти..." (БХИ, 8-се том, 229-сы бит). Иртәктә "Һаҙлыҡ" һүҙе баш хәреф менән яҙылған. Ғөмүмән, мең башҡорттары йәшәгән ареал һәр ваҡыт һаҙлыҡлы, батҡылыҡлы (хатта Мәкәш һүҙенең батҡылыҡ, русса тәржемәлә — "трясина" тигән мәғәнәһе бар) булған һәм яҙмала ҡамышлыҡтар тураһында һүҙ булыуы тәбиғи хәл, сөнки заманында эске бер диңгеҙҙе хасил иткән Асылыкүл дә үҙ мөхитенең һыулы-һаҙлы, күлле булыуына йоғонто яһаған. Мул һыулы йылға үҙәндәре лә һаҙмат урындар булған.

Башҡорт телмәренә, тарихнамәһенә инеп киткән был "ҡаҙан" һүҙе ниндәйҙер ваҡиғаларға төбәп, шәхсән исемдәр менән дә бәйләнгән, әлбиттә. Шәжәрәләрҙә боронғо мең ырыуы тоҡомдарында Ҡаҙансы тип аталған быуын күрһәтелә. Шул уҡ ваҡытта шәжәрәләр "Ҡаҙансы" тип билдәләнгән тоҡомдоң Хоҙайбирҙе исеме менән йөрөтөлгән бер күренекле шәхесе тураһында ла хәбәр ҡалдырған. Беҙгә бында ошо тәү ҡарауға ябай тойолған "ҡаҙан" һүҙенең ниндәй мәғәнә йөрөткәнен төшөнөргә кәрәк.

Иң алда шуны билдәләү фарыз: Ҡаҙансы һүҙе башҡорттарҙа тоҡом атамаһы ла булып тора. Күп ырыуҙарҙың тоҡомдары ошо Ҡаҙансы исеме менән бәйле. Меңдәрҙә, юрматыларҙа, таныптарҙа Ҡаҙансы нәҫелдәре бар, ә күпме ошо исем менән башҡа атамалар! Бәләбәй өйәҙендә борон бер нисә Ҡаҙан ауылы булған, урыҫтар уларҙы Казанка тип атай башлаған, бөгөн дә был ауылдарҙың бөтмәгәндәре ошо исемде йөрөтә. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтереп була, хатта ошо ыңғайҙан Татарстандың баш ҡалаһы Ҡазан исеме лә фекергә килә. Ҡаҙансы этнонимы Урта Азияла ла киң таралған, тип билдәләй Рим Йәнғужин. Бына ошо әхүәл — Ҡаҙансы нәҫелдәренең башҡорт ырыуҙарында күп таралыуы — был тоҡомдоң күп һанлы булыуын күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта һорау тыуа: Хоҙайбирҙе үҙе булғанмы был нәҫелдең башы, йә иһә, был нәҫел башҡорт тоҡомдарында булып, Хоҙайбирҙе уның дауамы һәм Ҡаҙансы тоҡомоноң бер вәкилеме? Шәжәрәләрҙән йәнә цитата: "Сын Худайберди — Қамай, сыновья его Аккуджа и Танбулат". Аталған кешеләр был тармаҡтың күренекле һәм киң билдәле вәкилдәре һаналып, үҙҙәре лә был тоҡомдо дауам иткән нәҫел башлыҡтары булған. Ошо мәғлүмәтте меңдәрҙең бер мәғлүмәтле кешеһе үҙ ырыуҙаштарына еткереүҙе кәрәк тип тапҡан. Был кешеләрҙең быуындары "Башҡорт шәжәрәләре" (2002 йыл) китабында күрһәтелгән.

Хәҙер мең ырыуы шәжәрәһен ҡарайбыҙ: "Во время Аксак Тимура случилось великое истребление людей. Потом из их рода (Урадача — шежере) остался один сын, имя его было Сангусин. Бийство своего деда принял он. Его сын Сасбуга. Его сыновья там погибли. Из их рода остался один сын, Чу-бий. Бийство принял он". Мең ырыуы тоҡомдарының быуаттарға һуҙылған хәл-ваҡиғаларын шәжәрәләр шулай теркәп ҡалдырған. Юрматы шәжәрәһендә Хоҙайбирҙе "Приемный сын Юрматы-бия" тип атала һәм уның дауамы — Қамай тип килтерелә. Қамай тоҡомоноң өҫтә күрһәтелгән Аккуджа тармағы Сытырман ауылы шәжәрәләрендә күренә һәм шәжәрә башында "Отец их кто?" тигән һорау тора. Тимәк, шәжәрә яҙған кеше Аккуджаның сығышын белмәй. Бына ошо әхүәл Хоҙайбирҙенең төп тамырҙары мең шәжәрәләрендә булыуын күрһәтә. Ошоға нигеҙләнеп, Хоҙайбирҙе-Ҡаҙансының тоҡомдарын мең ырыуы шәжәрәләренә, "Иҙеүкәй һәм Мораҙым" иртәге мәғлүмәттәренә һәм башҡа сығанаҡтарға таянып барларға тура килә. Юл ыңғайында шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, Хоҙайбирҙенән киткән тоҡомдарҙың өҫтә күрһәтелгән Таңбулат нәҫеле мең шәжәрәләрендә айырым күрһәтелә. Был нәҫелдәр күпкә һуңыраҡ йәшәгән быуындар. Улар — Бурнаҡтың туғаны Йәдкәр мырҙа ҡулы аҫтында булып, нуғайҙар менән китмәйенсә, Башҡортостанда тороп ҡалған һәм үрсеп киткән Тәнекәй нәҫелдәре. Меңдәрҙә ошо тоҡомдан киткән нәҫелдәр айырым шәжәрәлә күрһәтелә һәм Таңбулат исеме менән башлана. Таңбулаттың беренсе улының исеме Байбулат. З.Вәлиди Ҡараһаҡалдың да ысын исеме Байбулат булған тип яҙа. Бында эҙләнергә урын бар.

Ҡаҙансы атамаһы Иҙеүкәйгә ҡағылышлы булыуы билдәләнде. Иҙеүкәйҙең Хоҙайбирҙе тип аталып китеүенә иртәк ишара яһай: “Изге баба Төкләҫтең балаһы ла булманы, сағаһы ла булманы. Берәй бала биреүҙе бер Хоҙайҙан һораны. Иҙел буйы йәйләүҙә баба Төкләҫ тирмәлә, йә, Хоҙай, тип ятҡанда бер ир бала тыуҙы, ти” (БХИ, 8-се том, 150-се бит).

Тимәк, бер ҡатын-ҡыҙ заты йөклө булғанда Төкләҫ баба нәҫеленән берәү, ир бала тыуыуын теләп, Хоҙайға ялбарып доғалар ҡылған. Иртәк дауам итә: “Балаһына туй яһап, ил фекерен самалап, уланына атыны Иҙеүкәй тип ҡуйҙы, ти”. Ил фекерен дә белгертә иртәк: Ағиҙел йылғаһы ил яуында дошмандан иҙеү булғанға: “Ун ике йорт-ырыуға был да иҙеү булһын, тип, Илгә килгән дошманды Ағиҙелдәй быуһын, тип, Иҙеүкәй тип ҡуйҙы, ти”. Бына шулай Хоҙайҙан теләп алынған бала Хоҙайбирҙе булған да инде һәм бала табыу әхүәле мәғәнәһен йөрөтә булып сыға. Башҡорттоң булмышына ярашлы, был баланы тағы ла Тирмә, Иҙеүкәй тип тә ололағандары күренеп тора. Күп тә үтмәй, ошо тоҡом ерендә үҙ илен Ағиҙелдәй быуырлыҡ ир-ат заты — Иҙеүкәй батыр донъяға килә.

Ошо урында Ш.Нафиҡовтың “Урта быуаттар Башҡортостан тарихынан” йыйынтығында килтерелгән мәғлүмәт урынлы булыр: “Аның (Солтан Җәләлетдин тигән легендар кешенең) ике углы бар иде, беренең аты Әдһәм, беренең аты Баба Түкләш, Баба Түкләш углы Тирмә атлыйг ирде. Бу Тирмә Әдил-Җайыкта хасил булды. Аның углы Казанчы атлыйг ирде”.

Бында “Әдил-Жайыҡта хасил булған Тирмә” атамалы шәхес иғтибарға лайыҡ. Ир-ат исемендә сәйер тойолған был һүҙ борон бөгөн аңлай алмаҫлыҡ дәрәжәлә оло мәғәнә йөрөткәндер һәм иң әүәл шундай фекер тыуа: был көтөлгән бала, Хоҙайҙан теләп алынғанлығы менән бергә, затлы нәҫелдән булған, әлбиттә. Фәҡәт ошо баланың дәрәжәһенә һәм нәҫел-сығышына бәрәбәр, уның тыуған урыны атамаға әйләнеп китә. Боронғо башҡорт балаһына бер ҙә исем эҙләп аптырамаған — бала тирмәлә тыуған һәм ошо исем менән был зат башҡорт шәжәрәләрендә теркәлгән. Бөгөн дә ошо атама менән тирә-яҡҡа киң билдәле Баш Тирмә ауылы йәшәп килә. Был ауыл 1917 йылда д.Башкирские Термы булып теркәлгән һәм 41 йортта 189 башҡорт, 27 йортта 142 мишәр иҫәпкә ингән (“Западные башкиры”. Өфө. Ҡитап. 2001 йыл). Был күренекле ауыл тарафтары боронғо хандар тереклек иткән төбәк булыуы менән билдәле лә инде. Башҡорттоң исем биреү маһирлығы Тирмәнең икенсе быуынында ла сағыла — Ҡаҙансы тип атай ул үҙенең уланын, был уның тыуған урынына күрһәтеп тора, әлбиттә. Ҡаҙансы тоҡомдарынан меңдәр тарихында ифрат ҙур урын алып торған Ҡаҙанфәрҙәнде Ҡаҙанфәр исеме менән шәжәрәләргә ингән дә инде.

Риүәйәттәрҙән Төкләҫтең Өфө тарафтарынан Ағиҙелдең икенсе яғына күскәнлеге билдәле. Был урындар бына шул Баш Тирмә ауылы булып, “Хандар урҙаһы” атамаһын алып киткәндер, тип фаразларға нигеҙ бар. Өҫтәге цитатаны дауам итәбеҙ: “...Казанчы атлыйг ирде... Аның углы Исламкыйа... Аның углы Кадеркыйа... Аның углы Котлыкыйа, ул һәм Сәмәркәндтә пәйда булды. Аның углы Идик бий (Иҙеүкәй) рәхмәтуллаһ галәйһәм әҗмәгин”. Был мәғлүмәт Ҡаҙансы нәҫеленән булған тоҡомдарҙың Урта Азияла тамырланған бер быуынына күрһәтеп үк тора. Беҙгә билгеле мәғлүмәттәрҙе файҙаланып, Төкләҫ бабаның Үҙәк Башҡортостанда таралған тоҡомдарының нәҫел сылбырын ошолай төҙөп була: Солтан — Төкләҫ баба — Тирмә — Ҡаҙансы, уның өс улы: Исламҡыя, Ҡәҙерҡыя, Ҡотлоҡыя, һуңғыһынан — Иҙеүкәй батыр, ә

уның уланы — Мораҙым. Был сылбыр иртәк хикәйәттәре менән дә тап килә: “Иҙеүкәй һандыҡты асҡан, болан тирегә яҙылған бер ҙур китапты алған. Күҙен текләп ҡарағас, ошо һүҙҙе уҡыған: Ейәнемдән бей булып, Ҡотло тигән ир тыуыр. Балдарымдың кинйәһе, иң доғамдың иркәһе Тора тигән бей батыр Ҡотло тигән бүләмдең, тотмағанға йоламды, бейлегене юҡ ҡылыр. Тыумам тыуыр Ҡотлонан, Иҙеүкәй тигән ат ҡуйыр. Яуыз булыр йөрәге, илдә йөрөп ҡон ҡыуыр. Унан тыуған ете ят, Мораҙым тигән ат ҡуйыр. Бөтә Урал буйында һис аямай ҡан ҡойор”. Тик бында Мораҙым Төкләç бабаға тыуаят булып сыға, ә Мораҙымдың уландары етенсе быуын — етеят булып килә.

Был килтерелгән нәçел сылбыры өçтә ҡуйылған һорауға яуап бирә. Ҡаҙансы нәçеленең башы Төкләç бабаның улы Тирмә-Хоҙайбирҙенең уландарынан башланып, мең ырыуының ошо тоҡомон күрһәткән атама булып тора. Башҡорттарҙа һәр нәçелдең дөйөм бер атамаһы ла булған. Төкләç бабаның нәçеле Сәсле исеме менән йөрөгәне күренә. Был атама нәçелдең төклө, йөнлө икәнлеген күрһәтеп, башҡорттарҙа хупланған был сифатты дәрәжәгә күтәреү булғандыр. Юрматыларҙа — Сәсле дәрүиш, меңдәрҙә — Сәсбуға (Р.Кузеев хеҙмәтендә уның Сасы (Сашы) буки тип аталған варианты ла бар) — был атамалар бөтәһе лә Төкләç баба нәçеленеке. “Төкләç”тән оло бабаның да (атаһының) бер нисә исеме булған: Түрә ҡылыс, Түрә баба Төкләсеү, Ғәзиз баба Төкләсеү, ҡаҙаҡтарҙа Баба-Туҡты-Чачты Азиз исеме билдәле. Юрматы шәжәрәләре Сәсленең атаһын Шәйех дәрүиш тип атай, ә мең шәжәрәләре Сәсбуғаның атаһын Сангусин тип күрһәтә.

Мең шәжәрәләрендә Сәсбуға тоҡомонда Çыубей (Чу-бий) исеме килтерелә, ә меңдәрҙең ун бер тармағының бишеһен çубейҙәр ҡәүеме тәшкил итә. Шәжәрә нимә яҙғанын ҡарайбыҙ: “Сангусин. Бийство своего деда принял он. Его сын Сасбуга. Его сыновья погибли. Из их рода остался один сын — Чу-бий. Бийство принял он”. Çубейҙәрҙең тамырҙарын билдәләгәндә Çубей атамаһының мәғәнәһен төшөнөү зарурлығы бар. Был һүҙ, әлбиттә “һыу буйҙарының бейе” тигән мәғәнә йөрөтөп, Çыу бейенең сығышын яҡшы белгән тоҡомдаштары ниндәйҙер бер мәшһүр Һыуға ишаралап, “Һыу бейе” — бер билдәле шәхестең дәрәжәһен һәм бер үк ваҡытта тамырҙарын күрһәткән атама. “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” иртәгенең бер варианты фәҡәт рус телендәге тәржемәлә һаҡланып, унда ошондай юлдар бар: “По народным сказаниям, Баба Газиз имел сына по имени Баба Тукляса, последний был женат на дочери Водяного царя” (БХИ, 8-се том, 386-сы бит). Бында әкиәтләштереү хикмәте тойолһа ла, ғәмәлдә һүҙ беҙ һөйләгән Çыу бейе тураһында бара булһа кәрәк. Башҡорт ырыуҙарының эске төҙөлөшөн аңлап бөтмәгән фольклорсы, урыç кешеһе И.В.Салтыков өсөн Çыу бейе “Водяной царь” булып китеүе бик ихтимал. Ә ысынбарлыҡта һүҙ реаль тарихи шәхес һәм меңдәрҙең ҙур бер тоҡомо тураһында бара.

Мең ырыуы ареалын көньяҡ менән бәйләп тапҡырлап киткәндә, Хазар (Каспий) диңгеҙенең көнсығыш ярында атамаһы һаҡланып ҡалған Мангышлак төбәген күрәбеҙ. Меңдәр был исемде үҙ ҡәүеме менән бәйләп, ул урындар меңдәр ҡышлағы булған, тип фаразлайҙар. Беҙ был фаразды бала саҡтан уҡ ишетеп үçтек. Үҙәк Башҡортостанда ла Ыçлаҡ ((ғ)ҡышлаҡ) атамаһы менән урын-ер исемдәренең күп булыуын иçәпкә алғанда, был аңлашыла кеүек. Һәр хәлдә, был тоҡом үҙҙәрен меңдәрҙең Çыу буйы ҡәүеме итеп минлекләп, башҡорт шәжәрәләрендә теркәгәне күренеп тора, сөнки шәжәрәләрҙә Сәсбуға

уланы (тоҡомо) Чублек (рус телендә) тип бирелә, өҫтәмә аңлатмала был һүҙҙең "бүлек" тип килтерелгәне билдәләнә һәм шәжәрәләрҙә лә, тарихи әҙәбиәттә лә Чублек тоҡомо Ҫубей шәкелендә йөрөй. Ошо урында туҡтап, ҫубейҙәрҙең данлы шәхесе, замандашыбыҙ, бөйөк шағирыбыҙ М.Кәрим исеменә туҡтап, бер нәмәне билдәләп китке килә. Й.Солтанов интернетта биргән мәғлүмәтендә Ҡеләште "Чебешинский" улусына индерә, әммә бындай атама бер ҡасан да булмаған, ә Ҡеләш ауылы һәр ваҡыт Ҡара Яҡуп менән бер рәттән "Уфимский уезд, Чуби-Минская волость" эсендә иҫәпләнгән. 1834 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, Ҡеләштә 259 типтәр "по договору с башкирами-вотчинниками Чуби-Минской волости" йәшәгәне күренә, 1917 йылда "Поземельная перепись" 327 хужалыҡта 1762 типтәр теркәгән. "Западные башкиры" китабында ошондай иҫкәрмә бар: "У многих, видимо, сначала было написано татары, потом стерто".

1795 йылда "Уфимский уезд, Чуби-Минская волость" эсендә Илькашево (Илкәш) ауылы күренә, унда 10 йортта 35 башҡорт иҫәпләнә, был мәғлүмәттәрҙе лә өҫтәмә тикшерергә кәрәк.

Ҫубей (Ҫубый) атамаһы менән бер рәттән, Сәсбуғаның Үҙәк Башҡортостанда таралған тоҡомдары Ҡаҙансы атамаһын йөрөтһә, Төкләҫ баба — Яйыҡ Ҫубый, Иҙел Ҫубый, Нөгөш Ҫубый тоҡомдарының, йәки ҫубыйҙарҙың төрлө сығанаҡтарҙа теркәлгән бер вәкиле лә, мәшһүр тоҡом башы ла, тирә-яҡта киң билдәле әүлиә лә булған. Шуға ла ул үҙ тоҡомдаштары араһында ололап Сәсбуға тип йөрөтөлгән, уның тоҡомдарына ла "буға" атамаһы ҡушылып әйтелә торған булған, ә юрматылар уны дәрүиш тип атаған. Табын ырыуы шәжәрәләре лә Ҡарағәзиз әүлиә тураһында мәғлүмәт һаҡлай. Ҫыу бейе ҡәүеме тармағынан — Ҡаҙансынан беҙгә билдәле Иҙеүкәй батыр һәм уның тоҡомдары китә. Юл ыңғайында, Иҙеүкәй тип һөйөп әйтелгән исемдең ҙур күләмле дастан батыры Иҙеүкәйҙең оло бабаһына ла әйтелгән булыуын күрҙек. Был әхүәл бик мөһим башҡорт меңдәренең минлеген тәҡрарлау өсөн. Татар вариантына Идүкә булып кергән батырыбыҙ, итек эсендә йөрөтөлөп, шулай аталған, тип аңлатыла. Уны Төкләҫ тоҡомо үҙенең иҙеүендә үҫтергән, күкрәк йылыһы менән йылытып, иҙеүендә йөрөткән, әммә ир баланы бер ваҡытта ла итектә аҫрамаған.

Мең шәжәрәләренә мөрәжәғәт итәбеҙ. Чу-би (Ҫыу бейе) — Сәсбуға улы. Уның улы Чублек исеме менән бирелгән. Шәжәрәлә Чублектең дүрт тоҡомо күренә, улар бөтәһе лә ҫубыйҙар, уларҙың исеме русса тәржемәлә ошолай бирелә: Яйыксабый, Кадирсабый, Минглисабый, Идельсабый ("Башкирские родословные", 277-се бит). Шәжәрәләрҙе өйрәнгәндә шуны белергә кәрәк: улы тигән һүҙ туранан-тура был шәхестең улына төбәп әйтелгән һүҙ генә түгел, тармаҡтың тоҡомдарын күрһәткән исем дә.

Эҙләнеүҙәрҙә Чублек ҡәүеме туранан-тура Иҙеүкәй тоҡомо икәне лә аңлашыла. Иҙеүкәй әмирҙең утыҙға яҡын улы булған, тип яҙа тарихсылар, ә уның мәшһүр улы Мораҙымдың ике улының исеме иртәктә килтерелә: Ҡаҙанҡап һәм Ҡаҙанғол. Һуңғыһы хәҙерге Дәүләкән районында ҙур башҡорт ауылының исеме. Ҡаҙанҡап исемле улы иртәктә телгә алынып ҡына китә. Мораҙымдың ошо улы менән бәйле ҡайһы бер ваҡиғалар Әлбәк исеме менән дә бирелгәне күренә. Был атамалар хатта Мораҙымдың үҙенә ҡағылышлы булыуы мөмкин. Иртәктең бер вариантында Мораҙым менән булған бер әхүәл килтерелә. Берҙән-бер көндө атаһы алдында оло ғәйебен аңлаған Мораҙым үҙенә яза тәғәйенләй һәм үҙен кипкән тиренән яһалған ҡапҡа (кипкән ат тиреһен ҡап тип йөрөткәндәр) төрөп,

атаһының торлағына барып еткәнсе һуҡҡылап алып барырға ҡуша. Аҙаҡтан атаһы алдында ғәфү үтенә. Бына ошо хәлде күҙ алдында тотоп, Мораҙымдың үҙенә лә, уның тоҡомдарына ла Ҡаҙанҡап ҡушаматы тағылырға мөмкин. Әлбәк менән дә ошоға оҡшаш хәл булғаны яҙыла, ул атаһын (Иҙеүкәйҙе) артмаҡлап йөрөтөп, үҙ ғәйебен танып, атаһынан ғәфү үтенә.

Ғалимдар араһында “Нуғайҙарҙың Башҡортостандағы күренекле бейе Муса” Мораҙымдың ейәне тип иҫәпләнә. Муса бей шәжәрәләрҙә Бикмуш тип килтерелә. Был аңлашыла, тимәк, меңдәрҙең бер өлөшөндә был шәхестең ғәрәп (семит) телендә Моше тип яңғыраған исеме ҡулланышта йөрөгән һәм, бек (бей) атамаһын ҡушып, Бикмуш булып шәжәрәләргә инеп киткән. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, был исемде Муҫа шәкеле менән әйтәләр ине.

Мең ырыуында Чублек кеүек үк дүрт тоҡомдоң башы булған мәшһүр Ҡаҙанфәр бей шәжәрәләрҙә Бикмуштың ейәне — уның улы Гәрәйҙән тыуған, тип билдәләнә. Ш.Н.Иҫәнғоловтың бер мәҡәләһендә, Муса бейҙең биш ҡатынынан ун һигеҙ улы булған, тип исемдәре килтерелә, ләкин улар араһында Гәрәй бей исеме юҡ, мәгәр икенсе шәкелдә булмаһа.

Чу-би, Чублек. Меңдәрҙең Ҫубый тоҡомондағы был атамалар шәжәрәләрҙә килтерелә, тинек. Унан башҡа, Чублек атамаһы — боронғо Бүләр улусында ҡала (ауыл) исеме, уның картала Кзылтюбяк тип яҙылған икенсе исеме лә бар. Юл ыңғайында шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Чублек ҡәүемдәре таралған урындарҙа “ҡыҙыл” һүҙе атамаларҙа йыш ҡулланыла. Мәҫәлән, Әлшәй Ташлыһынан сыҡҡан ҫубыйҙар ҡәүеме үҙҙәренең ауылдарын Ҡыҙылҡабаҡ тип атаған. Хәҙер был урында Таштүбә ауылы урынлашҡан. “Ҡыҙыл” һүҙе менән ҡуш атамалар Танып буйҙарында ла булған. Чублек исеме үҙ телебеҙҙә Ҫыу бүлеге мәғәнәһе менән Һыу бейенең ҡәүемен дөйөмләштергән атама икәне аңлашыла. Беҙҙең ауылда ошо исемде мәрәкәләп Сүплек нәҫеле тип йөрөтөүҙәре билдәле. Күрәһең, уның “ҫубый” шәкелендә яңғырауы Ҫу(п)блек булған. Шәжәрәләрҙә Чублектең дүрт тармағы (“у него было четыре сына”) хаҡында яҙылған. Ҡаҙанфәр менән берлектә мең ерҙәрендә нуғайҙарҙан һуң ҡалған ҡәүемдәр эсендә “Чублек. Он был родственником Казанфари” тигән иҫкәрмә бар. Ләкин Чублек шәхсән бер кешенең исеме түгел, әлбиттә. Был мәғлүмәтте беҙгә шулай аңлау тейешле: әгәр ҙә улар тәржемәлә “родственники” икән, тимәк, улар — бер нәҫел кешеләре. XVI быуат урталарында Ҡаҙанфәр менән берлектә Һыу бүлеге тип иҫәпләнгән мең башҡорттары, нуғайҙар менән китмәйенсә, үҙ ватанында тороп ҡала. Дөрөҫөрәге, боронғо Ҫубый тоҡомонан булған һәм үҙе лә Ҫубый тоҡомон дауам итеүсе Төкләҫ бабаның Тирмә, Ҡаҙансы варисы Ҡаҙанфәр-Бурнаҡ ҡәүеменә ҡушылып, меңдәрҙең был тарафтарҙа тамыр йәйгән тоҡомдары Ҫыу бүлеге (Чублек), Иҙеүкәйҙең яуҙаштары һәм ҡулдаштарының тоҡомо, улар менән бергә табындар ҙа, юрматылар ҙа — ҡыҫҡаһы, күп яуҙар менән хәлһеҙләнгән Үҙәк Башҡортостан халайыҡтары бөтәһе лә бер булып, үҙ илдәрендә йәшәп ҡалғандар. Был әхүәлдәр шәжәрәләрҙә бик асыҡ яҙылған: “...Они так слезно умоляли, что Бурнак-бий решил не уходить”. Был юлдар юрматылар шәжәрәһенән. Ошондай уҡ хәлде меңдәр шәжәрәһе лә яҙа: “Казанфари-бий сказал оставшимся: “О, сотоварищи! Уйдя отсюда, мы не сможем найти себе пристанища. Подобную этой земле, где мы найдем другую землю?” И все его сотоварищи заплакали и сказали: “О, Казанфари-бий! Если умрем, то здесь, если выживем, то (тоже) здесь!”

Фарсынан ингән “фәрзәнд” һүҙе вариҫ мәғәнәһен йөрөтә. Шуға ла Ҡаҙанфәрҙең атамаһы Ҡаҙансы вариҫы мәғәнәһендәге титул булғандыр, тип фаразларға нигеҙ бар. Берәй эҙләнеүҙәрҙә Ҡаҙанфәрҙең шәхсән исеме лә килеп сығыуы мөмкин әле. Күреүебеҙсә, боронғо мең башҡорто үҙенең тоҡом башы Ҫыу бей исемен дә, уның Үҙәк Башҡортостандағы нәҫеленең быуыны — Тирмә улы Ҡаҙансы исемен дә ҡабатлап, ошо нәҫел ағзаларын эҙмә-эҙлекле билдәләп килгән булып сыға. Тимәк, боронғо Ҫубый араһында Ҡаҙансы тоҡомо айырым бер быуын булып, ошо быуын Иҙеүкәй һәм Мораҙымдың вариҫы Ҡаҙанфәр кеүек тарихта киң билдәле данлы шәхестәрҙең тоҡомдары менән дауам ителгән.

Р.Янғужин бер хеҙмәтендә өҫтә телгә алынған Ҡаҙанҡап исемле шәхестең ҡушаматы Бурнаҡ булған, тип яҙа. Ҡаҙанҡап атамаһы фәҡәт Мораҙым шәхесе менән бәйләнештә осрай. Тимәк, Бурнаҡ Мораҙым тоҡомонан булған, тип ныҡлы әйтергә була. Мораҙымдың хакимлыҡ ваҡытын ғалимдар 1426—1440 йылдар менән билдәләй, ә бына халыҡ телендә Мораҙымды бей булмаған, фәҡәт батыр ғына булған, тип тә йөрөткәндәр. Бурнаҡ заманы йөҙ йылдан һуңыраҡ — урыҫтарға ҡушылыу башланған ваҡыттар, ошонан сығып, был исемде нәҫел ҡушаматы тип аңлау тейешле, сөнки Бурнаҡтың Ҡаҙанҡап нәҫеленән булыуы күренеп тора. Бурнаҡ бей З.Вәлиди хеҙмәттәрендә лә телгә алына: “Во времена Урус-мурзы в Ср. Башкурдистане родом табын управлял Бурнак-мурза” (“История башкир”. Өфө. 2010, 42-се бит). Ошонда уҡ З.Вәлиди яҙа: “До 1586 года все башкиры и остяки на Самарской и Уфимской сторонах были подданными Урус-мурзы”. Ошо ваҡиғаларға бәйләнешле З.Вәлидиҙең тағы ла бер цитатаһы аҫтараҡ килтерелә. Бына шундай өҙөк-өҙөк мәғлүмәттәрҙе бергә туплағанда, Ҡаҙанфәр шәхесенең Үҙәк Башҡортостанда тотҡан урынын баһаларға мөмкин һәм уның Мораҙым тоҡомо булыуы ла, Бурнаҡ менән икеһе бер шәхес икәнлеге лә асыҡлана.

Иртәктең татар вариантында Иҙеүкәй “кыл-кыл чәчле, кыл түбәле Кобогыл”, ҡаҙаҡ вариантында Ҡобоул тип аталған — был “ҡобауҙар уғлы”, тимәк, иртәктә сағылған ваҡиғалар ҡобау-меңдәр мөхитендә булған. Быны раҫлай торған ышаныслы дәлил — ҡобауҙарҙа Бурнаҡ нәҫеле бар. Бүздәк районында Бурнаҡ исеме менән ауыл да булған, ләкин хәҙер ул бөткән. Тимәк, мәғлүмәттәр сығанағына ярашлы, Иҙеүкәйҙең бер вариҫы Бурнаҡ исеме менән билдәле. Бына ошо дәлил Бурнаҡ менән Ҡаҙанфәр бер шәхес икәнен иҫбатлап ҡына ҡалмай, тағы ла бер фараз тыуҙыра. Иҙеүкәй-Ҡобағол мең башҡорттарының боронғо ҡобау-мең тоҡомона мөнәсәбәтле булған. Уларҙың биләмәләренең бер өлөшө Өфө тирәһендә, хәҙерге Иглин (боронғо исеме Ичкин. — ***З.Вәлиди***), Нуриман районы ерҙәрендә булған. Ҡобауҙар анклав булып ҡына ҡаңлылар араһында ла урынлашҡан, ләкин был тарафтар уларҙың тарихи ватаны булмаған. Ниндәйҙер сәбәптәр менән ерһеҙ ҡалған ҡобау-меңдәрҙең бер өлөшөнә ҡаңлылар үҙ биләмәләренән ер бүлеп бирәләр. Был ауылдарҙың һәр береһенең атамаһында “ҡобау” ҡушымтаһы булып, улар үҙҙәренең ырыу-тоҡомон билдәләп килгәндәр. Уртаҡ майҙандарҙа йәшәп ятҡан башҡорттар ырыу-ара хәлдәр тураһында хәбәрҙар булған, әлбиттә, һәм үҙ заманында мәшһүр шәхестәр хаҡында үҙ шәжәрәләрендә мөмкин тиклем тулы мәғлүмәт биреп ҡалдырырға тырышҡандар, ә бына ҡобау-меңдәр тураһында мәғлүмәт бик аҙ, ә ошо ҡәүем башҡортто халыҡ иткән ырыу башы булыуы мөмкин. “Ҡобау” башҡорттарҙа инә ҡортто ябып аҫырай торған ҡапты билдәләгән. Был һүҙ бик боронғо тамырлы

булып, башҡорттарҙа ҡулланылған бик күп һүҙҙәр “ҡоба” тамырына ҡушып ялғанған: Ҡобайыр — ҡобауҙар йыры, Ҡобағол — ҡобауҙар улы, Ҡобағош — ҡобауҙар ҡошо, Ҡобатал — талдан яһалған (үрелгән) ҡап (йорт), Ҡобаһыр — ифрат тәрән мәғәнә һаҡлаған һүҙ. Эҙләп киткәндә, миҫалдар күп табылыуы мөмкин. Боронғо башҡорт тиктомалға ғына Шүлгән мәмерйәһендә бал ҡорто һүрәте яһап ҡалдырмаған, ҡобауҙар ҡырағай бал ҡортон тәүләп үҙләштергән һәм файҙаланған ҡәүемдер, тип етди уйланырға нигеҙ бар. Улар, әлбиттә, инә ҡорттоң көс эсендә тотҡан урынын бик яҡшы аңлағандарҙыр, үҙҙәренең ҡәбилә тереклеген дә ошо хикмәтте файҙаланып ҡороуҙары мөмкин. Бал ҡорто образы иртәктә күп файҙаланыла, мәҫәлән, “Һабрау... оран һалып барына, бал ҡорто инәһеләй, уртаға килеп сыҡҡан, ти”. Иҙеүкәйҙең вафатынан һуң булған хәлдәр былай яҙыла: “Ҡобауҙағы инәгә килеп һарылған бал ҡорттай, ете ырыуҙың барыһы: бисә-сәсә, балаһы, йәш елкенсәк, ҡарт-ҡорой кәфенләнгән Иҙеүкәйҙе сыр-сыу һырып алған, ти”.

Иҙеүкәйҙең ҡобау тамырлы булыуына Р.Г.Кузеевтың “Происхождение башкирского народа” тигән хеҙмәтендә килтерелгән тарихи мәғлүмәт тә этәрә: “Эрзен, сын Сашы-буки, поделил уделы Куби и области Суби”. Тимәк, заманында ҡобауҙарҙың үҙ өлөш ерҙәре булған, хатта Р.Янғужин “ҡобау” — монгол сығышлы һүҙ — өлөш, яҙмыш тигән мәғәнәне аңлата, тип белдерә. Ошо “удел” һүҙенең нөсхәлә нисек яҙылғанын табып, мәғәнәһенә төшөнгәндә, күп нәмәләр аңлап булыр ине. Бына ошо хәбәр — Сәсле тоҡомонда, ошо иҫәптән Иҙеүкәйҙең дә тоҡомонда Эрзен (Фәрзәнд) атамаһы ҡулланышта йөрөгән булыуын күрһәтә. Әгәр фәрзәндтәрҙән кем дә булһа берәү ер бүлеү ғәмәлдәрен башҡарған икән, был әхүәл уның ҡобауҙар “удел”ында хужа булыуын аңлата. Уның үҙ иле Ҡобау иле булған, әлбиттә.

“Сын Саши-буки” булған Эрзен — йә Иҙеүкәй үҙе, йә Иҙеүкәйҙән алдараҡ тоҡомдан булғандыр, тип фаразларға була. Иртәктә хан Иҙеүҙе, минең һөйөклө фәрзәндем, тип атай. Бында Иҙеүкәй үҙ ҡәүеменең фәрзәнде, ә хандыҡы түгел. Бында хан тик уның инде бығаса тиклем билдәле булған дәрәжәһен файҙаланып, уның, бөгөнгө тел менән әйткәндә, титулын ғына атай. Мәҫәлән, беҙ бөгөн шундай дәрәжә белдергән һүҙҙәрҙе ҡулланабыҙ: хәҙрәт, әфәнде, хужа, господин, сэр, һ.б. Ә үҙ заманында бына ошо мәғәнәлә ҡулланылған ҡәҙимге һүҙ булған ул — фәрзәнд. Идеаллаштырылған образ ҡанундары буйынса Иҙеүкәй йәш ваҡытынан уҡ яҡшы-яманды айыра белгән, ғәҙел хөкөм йөрөтөүсе шәхес итеп күрһәтелә. Ете ырыу бейҙәре ханға вассал булыуҙарын белдереү ниәте менән барғанда ла, Иҙеүкәй бармай ҡала, уның фәҡәт Һабрау — халыҡ аҡылы менән файҙаланып, үҙ ғәмәлен атҡарыу ниәте күренә. Бына шундай бойондороҡһоҙ, ғәҙел шәхескә хандың мохтажлығы була, һәм ул Иҙеүкәйҙе үҙ яғына ауҙарыуҙы, үҙенә хеҙмәт иттереүҙе маҡсат итеп ҡуя һәм был ниәтенә өлгәшә. Был ниәтте тормошҡа ашырғанда Иҙеүкәйҙе ҙурлап, уға “фәрзәнд” тип өндәшеүе Иҙеүкәйҙең үҙ халҡы эсендә тотҡан дәрәжәһенә һәм данына ишара, әлбиттә. Уға бағышланған иртәктә Иҙеүкәйҙең фәҡәт урындағы — Уралдағы ҡәүемдәрҙең түрәһе булыуы күренә, ә хан алдында ул башҡа ҡәүем бейҙәре кеүек вассал ролендә була.

Тарих ғилемендә Иҙеүкәйҙе нуғай бейе, ә уның ата-бабаларын Башҡортостанға тәүләп килеп ултырған нуғай түрәһе итеп билдәләү урын алған. Иртәк бөтөнләй нуғайҙарҙы һөйләмәй. Ә башҡа төрки халыҡтарҙа, шул иҫәптән нуғайҙарҙа ла был иртәктең билдәле булыуы — үҙ заманында ошо данлы шәхестең Үҙәк

Башҡортостанда тотҡан урынын күрһәтеүсе бер дәлил. Кәрәкле сығанаҡтар табып, дәлилле мәғлүмәттәр менән раҫлағанда, йә булмаһа нигеҙле итеп кире ҡаҡҡанда, башҡорт тарихын хәҡиҡәт менән тулыландырып булыр ине. Бына бит иртәктә нимә яҙыла: "Ете батырҙы ниргә итеп, мең бейле нуғай йорт Иҙеүкәй яуын ишетһә, булат ҡылысын һелтәп, Иҙеүкәй килеп уҡталһа, данлап торған Урҙаңды ҡыран-яран ҡылыр ул".

Икенсе урында (татар варианты): "Җантимернең алты угыл, алтынчы угыл — Қобогыл, Қобогыл, дип беленеп, үсә куйды Идегәй". Иҙеүкәй "кыл-кыл чәчле, кыл түбәле Қобогол" тип тә атала. Был мәғлүмәт тә бик мөһим, ҡобауҙар улы булып үҫкән батыр, меңдәрҙең ике тоҡомоноң уртаҡ вариҫы иҫәпләнеп, нәҫел дауамы, йә булмаһа яулаған Фәрзәнд (Эрзен) булыуы мөмкин. Бында иртәктә килтерелгән мәғлүмәттәр ниндәйҙер бер ваҡиғаға төбәп бирелгән һымаҡ күренә. Иҙеүкәйҙең тарихы күп варианттарҙа һөйләнеп, уның хатта әкиәтләштерелгән шәкелдәре булһа ла, уның икенсе тоҡом (Сәсле тоҡомо, Ҫубыйҙар тоҡомо) икәнлеге, ниндәйҙер фажиғәле хәлдәр һөҙөмтәһендә икенсе ҡәүемдә, Ҡобауҙар улы булып үҫеүе шәйләнә. Фажиғәнең төп сәбәбе Төкләҫтең теле менән әйтелә: "Балдарымдың кинйәһе, Тора тигән бей-батыр, тотмағанға йоламды, Ҡотло тигән бүләмдең бейлегене юҡ ҡылыр". Ә Ҡотло Иҙеүҙең атаһы итеп күрһәтелә. Иртәктән күренеүенсә, Тора бей арҡаһында бейлеген юғалтып, Туҡтамышта һунарсы шөғөлөндә йөрөгән Ҫубыйҙарҙың Ҡотлобайы бейлеген генә юғалтып ҡалмай, ә тотош быуыны фажиғәле рәүештә юғалып, уларҙың тоҡомонан бер Иҙеүкәй ҡобауҙар араһында Ҡобағол булып үҫә. Был хәл Иҙеүкәйҙең телмәрендә яҡшы төҫмөрләнә. Һабрау кәңәше менән Тора бейгә килгәс, ул әйтә: "Асыҡ йөҙлө илеңдә үҙ бауырым тиешеп, йылы ҡуйын асҡандың ҡуйынын ҡымтытып, һалҡын ҡаршы алмаҫһың!" Тимәк, шулай уҡ ҫубыйҙарҙан булған Тораның ҡәүеме Иҙеүкәйҙең үҙ бауыры була. Бына ошо дәлилдәр ярҙамында данлыҡлы нәҫелдән — әүлиәләр нәҫеленән булған Иҙеүкәйҙең тамырҙарын яҡшы белгән ҡәүемдәштәре уны үҙҙәренең тоҡомо — фәрзәнде итеп йөрөткәндәре аңлашыла. Иҙеү тоҡомоноң нәҫел билдәһе булған "ҡыл сәсле" сифаты иртәктә генә түгел, халыҡ хәтерендә лә һаҡланып килгән риүәйәт булғандыр, беҙ үҫкәндә сәсе ат яллы бер батыр булған, сөнки бейә һөтө имеп үҫкән, тип һөйләйҙәр ине. Шәжәрәләр Бурнаҡ бейҙең Ядкар (Йәдкәр) исемле туғаны булғанын күрһәтә. З.Вәлиди Тайбуға улы Ядкар мирза шәхесен телгә алып китә, был мәғлүмәттәр бер үк нәҫелдең эҙе булыуы ла бар, сөнки Тайбуға исеме йәнә лә шул "ҡыл сәсле нәҫелдең" сираттағы бер атамаһы булыуы мөмкин. Иртәктә Иҙеүҙең атаһы Ҡотло һунар ыласыны йомортҡаларын сит ҡәүемгә биргәне сәбәпле үҙ нәҫелен юғалтҡаны һөйләнә. Беҙҙең ауылда ошо сюжетҡа оҡшаған бер риүәйәт йөрөй ине: "Шундай ҡәүем булған икән, улар бер һыр (сер) белгәндәр, был һыр тутыйҒош йомортҡаһының эсенә йәшерелгән булған икән, шуға улар был йомортҡаларҙы бик һаҡлаған икән, бер кемгә лә күрһәтмәгәндәр һәм бер-береһенә был турала гелән иҫкәртеп торор өсөн "Тутия!" тигән оран ҡулланғандар икән", — тип һөйләйҙәр ине. Беҙ үҫкәндә бындай ҡатын-ҡыҙ исемдәре лә бар ине әле. Ысынбарлыҡта был һүҙ тамъяндарҙың ораны булған.

Тарих барышында Башҡортостан — Баш Ҡорт иле аша күп ҡәүемдәр үтеп торған, әлмисаҡтан үҙенең иле булған Ҡортҡа күп ҡәүемдәр килеп ҡушылған. Нуғайҙар ана шуларҙан булған һәм аҙаҡтан "...нам эта земля не подойдет" тип, "неисчислимые ногаи решили бежать". Әлбиттә, Баш Ҡортта нуғай тоҡомдары ла

тороп ҡалған. Был осраҡта улар махсус билдәләнгән. Быға миҫалды юрматылар шәжәрәһендә күрәбеҙ. Үҙ нәҫеле өҙөлөү ҡурҡынысы тыуғанда, Сәсле дәрүиш үҙ ҡыҙынан һәм нуғай тоҡомонан тыуған Юкәсөй уланы менән үҙ нәҫелен дауам итергә юл таба һәм был тармаҡ заманының йолаһы буйынса тоҡомға беркетелеп, айырым аталып китә. Әммә Баш Ҡорт үҙ тамырҙарын һәр даим билдәләп килгән, күп сәбәптәр менән нәҫелдәр өҙөлөп ҡалған, ләкин башҡорт нәҫеленән нуғай йә булмаһа башҡа халыҡ нәҫеле үҫеп сыҡмаған. Уртаҡ тамырҙар булған хәлдә лә, һәр тоҡом үҙ нәҫелен барлап, билдәле быуындарға тиклем мәғлүмәтте теркәп барған һәм шәхесе билдәле булмаған быуын тапҡырына Юкәсөй, Алдырғыш, Киленбирҙе кеүек махсус исемдәр менән киләсәк быуындарға иҫкәрмәләр ҡалдырған. Меңдәр шәжәрәһендә ошо Алдырғыш исеме менән килгән тармаҡта Дәмимдәр исеме бар. Был шәхес “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” иртәгендә телгә алынған Дәмми бей булыуы мөмкин, сөнки хакимлығын юғалтҡан бейҙең ҡәүемдәре урындағы меңдәргә ҡушылып киткән, һәм улар килмешәк булғанға, шәжәрәлә Юкәсөй, унан һуң Алдырғыш атамаһы тороуы аңлашыла.

Баш Ҡорттоң дөрөҫ тамырҙарын тергеҙеүҙе тарихи ғәҙеллек һаҡланғанда ғына еренә еткереп башҡарып була. Иҙеүкәйҙең тамырҙары юғалыуы — совет заманының “ҡаҙанышы”. Был тыйылған иртәккә беҙҙең тарихсыларыбыҙ яҡын килә алмаған һәм уның тарихнамәһе элегерәк үк боҙолған булып, уны бер кем дә төҙәтергә баҙнат итмәгән. Был, һис шикһеҙ, Башҡортостанда урыҫтар хакимлығы урынлашыуы менән бәйле. Сит-ят телдә күп атамалар боҙолған, башҡорттоң эске ырыу йолалары ситтә ҡалған. Был әхүәл күп ваҡиғаларҙы дөрөҫ йүнәлештә баһалау мөмкинлеген ҡыҫҡан. Мәҫәлән, үҙ заманында башҡорт тарихы менән ныҡлап ҡыҙыҡһынған Василий Юматовтың бер мәҡәләһендә Ҡәнзәфәр бейҙең йәш сағында батшаға барыуы тураһында әйтелә. Ләкин ул шәжәрәләр менән таныш түгел, тик халыҡ телендәге риүәйәттәрҙе генә файҙаланған һәм Ҡаҙанфәрҙең тоҡомдары ла ошо исемде йөрөтөү ғәҙәтен белмәй булып сыға. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Юматовтың ошо фаразына һылтанмалар күп осрай.

Ғөмүмән, меңдәрҙең сығышын һәм тамырҙарын юллағанда “Иҙеүкәй һәм Мораҙым” иртәге күп нәмәләрҙе аңларға ярҙам итә. Иртәктә Иҙеүкәй бөтә булмышы менән Баш Ҡорт тамырлы булып ҡына шәйләнә, ул сит-ят яуҙар баҫа килгәндә үҙ Ватанына ҡалҡан булырлыҡ Баш Ҡорт ҡәүемдәрен ойоштора алған эпик герой дәрәжәһенә күтәрелгән. Шуға ла уға Илеүкәй тип исем биреүҙәре, уның халыҡ ҡорто (иле, иләүе) араһында тотҡан урынын билдәләү булып, үҙ иле, үҙ ғәскәре булған ҡәүем башлығы итеп баһаланыуы күренеп тора. Тимәк, Иҙеүкәй үҙ ҡул аҫтына күп ерҙәр, күп ҡәүемдәр туплаған Илеүкәй була. Бында, әлбиттә, уның вариҫтарының күп булыуы һәм мираҫының ҙурлығы әһәмиәтле. Шуға ла фәҡәт бик ҙур биләмәләре булған Эрзен ғына, шәжәрә тәржемәһендә әйтелгәнсә, “мог поделить уделы Куби и области Чуби”. Ҡарталарҙа Бүләр улусында Чублек атамаһының теркәлеп ҡалыуы, ҫубыйҙарҙың күп тамыры Көнбайыш Башҡортостандың боронғо Бүләр, Байлар, Юрми улустарында билдәле Бүләр хандың ошо ваҡиғаларға мөнәсәбәтле булғанын күҙалларға нигеҙ бирә, һәм уның тәржемәүи хәлен тергеҙеү зарурлығы тыуа. Боронғо башҡорт меңдәренең был улустары башлыса бөгөнгө Татарстанға Башҡортостан ерҙәрен бүлеп ҡушылған майҙандарҙа тороп ҡалған. Был улустарҙа Иҙеүкәй тоҡомонан булған шәхес ошо исем — Бүләр хан исеме менән билдәле булып, ошо атама теркәлеп ҡалыуы мөмкин. Был йүнәлештә айырым эҙләнеүҙәр талап ителә, һәм башҡорт тарихының айырым бер мөһим өлөшө өйрәнелмәгән хәлдә онотолоп ятыуы күренеп тора.

Һабрау теле менән әйтелгән бөтә Ҡорттоң фекере шулай булған: “Иҙеүкәй, Иҙеүкәй тигән һүҙ — Урал, Урал тигән һүҙ! Иҙеүкәй китте тигән һүҙ — Урал күсте тигән һүҙ!” Был һүҙҙәрҙә Иҙеүкәй фәҡәт Урал иленең уланы булып күҙаллана. “Хан-тархандарҙы данлаған” был эпик дастан совет замандарында тыйылып, был әхүәл меңдәр тарихын һайытып ҡына ҡалмаған, бәлки, юҡҡа сығарырлыҡ дәрәжәлә онотторол, дастан үҙе лә халыҡ хәтеренән юйылып бөткән. Үҙенең тәрән фәлсәфәһе менән Баш Ҡорттоң әлмисаҡ ваҡыттарына ла ишара яһаған был Ҡобау йыры — ҡобайыр тиккә генә бөтә сюжет дауамында яҡшылыҡ-яуызлыҡ идеяһын “Урал батыр” шәхесенә бәйләп алып бармай. Бында хатта ниндәйҙер генетик бәйләнеш ятҡан кеүек тойола. Ул ғына ла түгел, халыҡ аҡылын үҙ булмышында төйнәгән Һабрау сәсән телендә Иҙеүкәй батырҙың тәҡдире Урал батыр менән бәйләнгән булып күренә — был фәлсәфә бөтә Баш Ҡорттоң боронғоһон күҙаллау, баһалау, уға үҙ урынын тәғәйенләү дәрәжәһенә күтәрелгән бөйөк милли фәлсәфә. Был фәлсәфә бөтә халайыҡтар тереклеге өсөн дә уртаҡ бер ҡиммәт булып, бөгөнгө буталсыҡтар заманында ла һәр кемгә маяҡ булырлыҡ ҡәләм һаҡлай. Иҙеүкәйҙең телмәренән бер өҙөк: “Мин — мин тиермен, Мин — Уралда ирҙермен!” Ә ниндәй һуң ул Урал иленең ир-заты? Бына ул ниндәй: “Мин — мин тигән ирҙермен! Ат өҫтөндә уйнай, тип, кәпәс кейгән ир ул, тип; Асылын һорамай аш бирмәм, атаһын һорамай дан бирмәм!”

Ә бына Мораҙымдың телмәре: “Мин булдым мин, мин булдым! Мораҙым тигән ир булдым!”; “Мин — мин инем, мин инем, яуға ҡаршы сыҡҡанда батыр торған ир инем!”; “Мин, мин килдем, мин килдем, урҙаңа төбәп мин килдем! Иҙелдә ятҡан ҙур илгә мал тултырам, тип килдем!” Был орандарҙа меңдәрҙең (миндәрҙең) йәшәйешенең дә, ырыу атамаһының да асылы ята һымаҡ тойола миңә. Бер ни тиклем пафос ритмына инмәйенсә, боронғо тамырлы, шиғри телле Баш Ҡорттоң ябай ҙа, тәрән дә, кешелекле лә фәлсәфәһен беҙ бөгөн аңлай алмаҫ дәрәжәлә үҙгәргәнбеҙ.

Өҫтә аталған Эрзен инсандың ҫубыйҙарға ла мөнәсәбәте булған. Бәлки, бына ошо мөнәсәбәт Иҙеүкәйҙең меңдәрҙә Чу-би (Ҫу-бей) тип аталыуына сәбәп булып, был өлкәләр фәрзәнд Иҙеүкәйҙең мираҫы, йә булмаһа улъя ерҙәре һаналғандыр ҙа. Бүләр улусында Чублек атамаһы менән ауыл (ҡала) булыуы был тарафтар боронғо ҫубыйҙарҙың биләмәләре булған, тип фаразларға нигеҙ бирә. Ошолай булһа, Иҙеүкәй Чублектең (Һыу бүлеге меңдәренең) дүрт тоҡомоноң Иҙел-Ҫубый тармағы вариҫы булып сыға. Тиккә генә хатта уның оло бабаһының тәҡдире “Илгә килгән дошманды Ағиҙелдәй быуһын” тип билдәләнмәй. Ә уның ҡулдашы Яйыҡ батыр Чублектең йәнә бер тармағы — Яйыҡ-Ҫубый тоҡомонан булып сыға. Шәжәрәләрҙе барлағанда ла Чублек атамаһы аҫтында Иҙеүкәйҙең ҡәүемдәре күренә. Иҙеүкәй С.Галиндың китабында Едигей исеме менән бирелгән, уның тыуған йылы — 1352, 1399 йылда “стал ханом Белой орды, в 1408 году ходил на Русь”, тиелә.

Нуғайҙарҙың Башҡортостандан күсә башлаған осоронда юрматыларҙың бер өлөшө үҙҙәренең Бурнаҡ бейгә ваҡытлыса иштәк булып ҡалыуҙарын белдерәләр. Юрматы шәжәрәләрендә үҙ ваҡытында ырыуҙар араһында билдәле булған тәүәрих — Бурнаҡтың тыуыу хәлдәре яҙылып киткән. Тимәк, был хәбәрҙәр риүәйәт рәүешендә халыҡ араһында киң билдәле булған. Төкләҫ кеүек мәшһүр шәхестең, Ҡылыслы Түрә вариҫының тәржемәүи хәле халыҡ хәтерендә теркәлеп барған, әлбиттә. Юрматы шәжәрәләре Бурнаҡты Сәсле дәрүиштең ҡыҙынан

тыуған бала итеп күрһәтә. Сылбырҙа Уҡа әбей исеме килтерелеп, уның ҡырында Мюркюнджан, Хоҙайбирҙе, Бурнаҡ исемдәре теркәлгән, уларҙың дауамы юҡ. Бына ошо дәлил дә Бурнаҡтың сығыш-тамырҙары юрматыларҙа булмауын күрһәтә, уларҙа тик Хоҙайбирҙе тоҡомоноң Бурнаҡтан киткән һуңғыраҡ быуындары күрһәтелеп, аталарының исеме юҡ, өҫтә “отец их кто?” тигән һорау тора, тип билдәләнде. Был тармаҡ юрматыларҙа нуғай-юрматы булып киткән, тип әйтелә шәжәрәлә.

Бурнаҡ тураһында теркәлгән мәғлүмәт бик мөһим. Бик күп яуҙарҙан һуң ир балаһы кәмеп ҡалған Сәсленең Ағиҙел буйында урынлашҡан, меңдәргә тура ҡағылышлы бер нәҫеле уның ҡыҙ балаһынан киткән тармаҡ менән дауам ителә, бәлки, бына ошо ҡыҙ — “дочь Водяного царя”? Бында нәҫел дауамы үҙ заманының йолаһы менән фатихаланған. Йәш бала аҡбуҙ ат ҡорһағы аша үткәрелеп, аттың һыртына, унан ат алдына һалынған һәм уға Бурнаҡ атамаһы бирелеп, ул тыумышы менән Сәсле нәҫеленең, Ҡаҙансының вариҫы тип иҫәпләнгән. Әлбиттә, был ғәмәлдәр доға-фатиха, оло туй-мәжлес менән үткәрелгән, улар күп тарафтарҙа мәғлүм булған. Уртаҡ майҙандарҙа йәшәп ятҡан халайыҡтарҙа был мәшһүр нәҫелдең данлы балаһын юрматылар Бурнаҡ тип, ә үҙ ырыуҙаштары — меңдәр Ҡаҙанфәрзәнд атамаһы менән шәжәрәлә теркәгән. Шул уҡ ваҡытта ҡобау-меңдәрҙә Бурнаҡ нәҫеле лә булып, эҙмә-эҙлекле тарихи хәтер күренеп тора. Бына был осраҡта ла Бурнаҡ һәм Ҡаҙанфәр икеһе бер шәхес, тип ныҡлап әйтеп була. Төкләҫ бабаның дауамы булған был нәҫел Сәсле дәрүиш исеме менән билдәләнгән. Ошо юрматылар яҙған йоланы атҡарған шәхес тә Сәсле нәҫелен дауам иткәнен күрһәтеү өсөндөр, шәжәрәләрҙә ул һаман да Сәсле дәрүиш исеме менән теркәлгән. Мең шәжәрәләрендә теркәлгән Ҡаҙанфәрҙең атаһы Гәрәй (йә булмаһа был кешенең тоҡомо) юрматы шәжәрәләрендә күрһәтелгән Сәсле нәҫеленән берәүҙең ҡул аҫтындағы нуғай булыуы мөмкин, ләкин был турала өҫтәмә дәлилдәр булмайынса, фәҡәт фараз итергә генә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта Гәрәй бей исеме табындар шәжәрәһендә килтерелгәнен дә иҫәпкә алғанда, Бурнаҡ-Ҡаҙанфәрҙең атаһы күршеләге табындарҙан булыуы ла мөмкин.

Күренекле бей, мең ырыуы башҡорттарының юлбашсыһы Ҡаҙанфәрҙең исеме ни өсөн шәжәрәләрҙә күрһәтелә, ә халыҡтың тел ижадында сағылмаған, шул уҡ ваҡытта шәхесенә ниндәй оло дастан бағышланған батыр Мораҙым — шәжәрәләрҙә юҡ, тигән һорау тыуа. Бында шундай яуап булыуы мөмкин: Ҡаҙанфәр ҙә халыҡ ижадында сағылған, ләкин уның исеме табындарҙа ла, юрматыларҙа ла Бурнаҡ булып урынлашҡан. Күрәһең, был ырыуҙарҙа уға тыуыу әхүәле менән бәйләп атама биргәндәр, ә Ҡаҙанфәрҙең үҙенең ырыуында ул фәҡәт ошо исем менән билдәле булған. Мораҙымға килгәндә, фекер ебе шундай: Ҡаҙанфәрҙең дүрт ҡәүеменең береһе — Ҫыу бей — мең. Был тоҡом уның “Худайбакты” тип исемләнгән тоҡомоноң исеме. Бер яҡтан, был әхүәл Ҡаҙанфәрҙең үҙ ҡәүеме Ҫубыйҙарҙан икәнен күрһәтһә, икенсе яҡтан, уның Хоҙайбирҙе тоҡомонан икәне күренеп тора, сөнки “Худайбакты” шул уҡ исемдең икенсе шәкеле. Шулай булғас, Мораҙымдың исеме шәжәрәләрҙә күрһәтелмәһә лә, уның мәшһүр тоҡомдарының эҙе ярылып ята. Тимәк, “сыновья Чуплюка” тип шәжәрәлә килтерелгән ҫубыйҙарҙың дүрт тоҡомо менән бер рәттән, Мораҙым-Ҡаҙанфәр сылбыры уларҙың бишенсе тоҡомо булып сыға. Был урында беҙгә иртәк мәғлүмәттәрен дә иғтибарҙан ситтә ҡалдырырға ярамайҙыр. Унда Мораҙымдың икенсе исеме — Нуретдин, татар вариантында Норадын,

ҡаҙаҡтарҙа Нуралы булыуы яҙыла. Нур Зарипов Нуралының Нурзеин исемле улы булған, тигән иҫкәрмә бирә. Ҡаҙанҡап менән булған хәл Нурзеин вариантында ла ҡабатлана. Бына был исем Эрзен, Фәрзәнд исеменә яҡын, һәм, ысынлап та, Ҡаҙанфәргә ишара булып, ул Мораҙымдың туранан-тура быуыны — Ҡаҙанҡап исемле улы (тоҡомо) булып килеп сыға.

Ҡаҙанфәр бейҙең тамырҙары, ысынлап та, Ҡаҙансынан киткән нәҫел тармағы булып, бында Ҡәнзәфәр бей исеменең ҡулланышҡа инеп китеүен осраҡлы бер тарихи хәл тип кенә ҡабул итергә мөмкин. Ул ғына ла түгел, Рәсәйгә ҡушылыу хәрәкәте башланған XVI быуат урталарында уның йәш кеше булыуы хаҡындағы фараз хәҡиҡәткә тура килмәй. Был әхүәлдә Ҡаҙанфәр һәм Бурнаҡ бер шәхес икәнен иҫбатлағас ҡына аңлап була. Юрматы шәжәрәләре бында тарихи аныҡлыҡ һаҡлаған һәм Бурнаҡ бейҙең вафаты күрһәтелеп киткән: 1552 йылдар тирәһе. Был ваҡытта Үҙәк Башҡортостан тарихында хәл иткес ваҡиғалар була — Ҡазанды урыҫтар баҫып ала, нуғайҙар араһында сыуалыш-ҡырғындар көсәйә, ҡаты аслыҡ-ҡоролоҡ хәлдәрҙе тағы ла киҫкенләштерә һәм бына ошондай хәлдәр башында Ҡаҙанфәр бейлегендә берләшкән ҡәүемдәр хакимһыҙ тороп ҡала. Сәйәси хәлдәрҙең үҙгәреүе һәр ҡәүемгә үҙ тереклеген айырым ойоштороп, хакимиәттең бығаса күрелмәгән яңы тәртиптәрен дә үҙләштереү зарурлығын тыуҙыра. Ләкин иң киҫкен ваҡыт арауығында бер майҙандарҙа йәшәгән ҡәүемдәр берләшеп, Ҡаҙанфәр ҡулы аҫтында ойоша алыуҙары Үҙәк Башҡортостанда башҡорт ырыуҙарының һаҡланып ҡалыуын тәьмин итә. Шуға ла Ҡаҙанфәр үҙ заманының мәшһүр бейе, юлбашсыһы, бер нисә ырыу ҡәүемдәрен берләштереп, уларҙы халыҡ итеп һаҡлап ҡалыусы ғәҙел башҡорт инсаны булып тора. Юрматы шәжәрәләре яҙа: “Оставшиеся с Бурнак-бием люди назвались иштяк. Все иштяки жили повелениями Бурнак-бия. Когда Бурнак-бий скончался, бийство поручили Татигачу”.

З.Вәлиди яҙа: “После ухода ногаев землями, подчинявшимися Кара Килембету, управлял султан по имени Букей, землями Ак Килембета, т.е. Уфой — мурза (князь) по имени Газанфер. А Букей-султан, видимо, из потомков Шибана, то есть туринских Шибанов”. Ләкин шәжәрәләр Ҡаҙанфәр менән нуғайҙарҙан һуң тороп ҡалған бейҙәр араһында Ҡараман тоҡомонан Тәнекәйҙе атай, Букей уның исем-көнйәһе булырға мөмкин.

Мең шәжәрәләре күрһәткән 1567 йылдағы документта Рәсәйгә яһаҡ түләй башлаған Ҡаҙанфәр ҡәүеменең тоҡомдары ғына күренә: “К милостивому падишаху послали четыре человека в Москву, чтоб они скрепили в книге: князь Янбакты, сына Кудаша, 2-го — Камачыка, сына Яйыксабый, 3-го — Уразлы, сына Урмана, 4-го — Махмуда, сына Дистана со спутниками их в год 1567-й” (268-се бит). Бөтә ил йөгөн үҙенә йөкләгән Ҡаҙанфәр, бигерәк тә ул йәш кеше булһа, батшаға бармай ҡалмаҫ ине. Тимәк, был ваҡытта ул инде иҫән булмай, әммә ләкин меңдәрҙең хәл иткес ваҡиғаларҙа ҡатнашырлыҡ тоҡом бейҙәре нығынып еткән була. Был тоҡом үҙҙәрен Ҡаҙанфәр ҡәүеме итеп минлекләп, һуңыраҡ үҙ-ара ер бүлеү хәлдәрен ойоштора һәм, уларҙың тарихи хәтерҙәренә муафиҡ, йөҙ йылдан һуң да Ҡаҙанфәр-бей исеме шәжәрәләрҙә үҙенә лайыҡ урынын ала.

Ҫубыйҙар — бик боронғо тоҡом тип уйларға нигеҙ бар. Башҡорт суперэтносының сығыш-тамырҙары дәлилле рәүештә иҫбатланһа, Баш Ҡортто — Урал батырҙан тарҡалған һәм үрсегән халайыҡтарҙы бөгөнгө башҡорт милләтенә тоташҡан тоҡом, тип ышаныслы рәүештә әйтеп буласаҡ. Мәшһүр Сәсле дәрүиш ошо тоҡом вариҫтарынан булған, шуға ла уның тоҡомо “фәрзәнд” атамаһын тыуымыштан уҡ

йөрөтөүе ихтимал. Боронғо башҡорт ырыуҙары — меңдәр, юрматылар, шулай уҡ табындар ҙа бер нисек тә был шәхесте урап үтә алмаған. Был мәғлүмәт уларҙың тарихында булған, телдән телгә күсеп, хатта үҙгәрмәйенсә лә шәжәрәләрҙә һаҡланған.

Ҡаҙанфәрҙең икенсе исеме булыуы мөмкин, сөнки атама был шәхестең тамырҙарына ғына ишара яһаған кеүек. Боронғо башҡорт был исемдең мәғәнәһен белеп ҡулланған, үҙ заманында был һүҙ ҙә ҡәҙимге ҡулланышта титул булыуы мөмкин. Әгәр "углан хан" титул булып, хан улы (башҡорттарҙа ханулан һүҙе бар) мәғәнәһен йөрөтә икән, Ҡаҙансы вариҫы тигән мәғәнә менән Ҡаҙанфәрзәнд исеме лә ҡулланышта йөрөүе башҡорт булмышы өсөн заманында тәбиғи ғәмәл булған, тип етди фаразларға була. Ә уның шәхсән үҙ исеме лә берәй эҙләнеүҙәрҙә килеп сығыуы мөмкин, сөнки урта быуат Башҡортостан тарихында исемдәре аныҡланмаған шәхестәр күренә. Ҡаҙанфәрҙең хәл иткес тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан ырыу бейе булыуын иҫәпкә алып, мәғлүмәтле бер юрматы башҡорто мәшһүр мең ырыуы бейе тураһында үҙ шәжәрәләрендә хәбәр ҡалдырған. Был аңлашыла, уртаҡ майҙандарҙа йәшәү менән бер рәттән, Хоҙайбирҙе тоҡомонан булған Ҡаҙанфәр-Бурнаҡтың юрматыларҙа ла нәҫелдәре булған.

Ҫубыйҙар мең шәжәрәһендә Һыу бүлеге (Чублек) атамаһы менән дүрт тоҡом булып теркәлгәнен күрҙек. Был халыҡтың тарихи хәтере ифрат юғары кимәлдә булыуын һөйләй. Һыу бүлеге ҡәүеме һыу туфанынан арынған һәм Уралда көн күреп алып киткән боронғо тоҡомдарҙан булыуы бар. Үҙ теленән төшкән атамаларҙы ғәзиз ерендә, үҙ Ватанында беркетеп, үҙ тарихында һаҡлап килгән халыҡ үҙен дә минлекләгән. Йәшәгән һәм биләгән ареалына ҡарап, ялан (улар йылан ырыуы булып ғәмәлгә ингән) башҡорттары, урман башҡорттары, һыу буйы башҡорттары, тау башҡорттары булыуы тәбиғи әхүәл. Һыу башҡорттары үҙ тамырҙарын Урал батыр ҡәүеме булараҡ белдереп, Кәүсәргә тиң Яйыҡ, Иҙел һәм Нөгөш йылғалары буйында таралған һыу ҡәүеме итеп, үҙ атамаһын ошо батырҙар исеме менән шәжәрәләрҙә һаҡлағас, башҡорттоң боронғолоғон иҫбатлар өсөн тағы ла ниндәй яҙма сығанаҡтар кәрәк тигән балаларса бер ҡатлы ябай фараз тыуа. Был яҡтан беҙ башҡа ғәүәм халыҡтарҙан бер ҙә айырылмайбыҙ. Әгәр боронғо башҡорт ҡырағай бал ҡортон илаһилаштырып, үҙен Ҡобау Баш Ҡорто тип исемләп, бал ҡортон Шүлгән мәмерйәһендә һынландырып ҡалдырған икән, был әхүәл, хатта бөгөнгө көн күҙлегенән дә, тәбиғи хәл.

Ҫубый башҡорттарының сығышын өйрәнеү бик тәрән эҙләнеү талап итә. Р.Кузеев меңдәр араһында Мәүәраәннәһерҙән сыҡҡан ҡәүемдәр булған, тип билдәләй. Был һығымта шәжәрәләргә нигеҙләнеп яһалған, уларҙа ла ошо уҡ мәғлүмәт һаҡланған. Ғәрәп теленән башҡорт ҡулланышына ингән был һүҙҙең ниндәй тараф һыуы һәм ерҙәренә төбәп әйтелгәнен аңлағанда, меңдәр тарихының бер билдәһеҙ битен асып булыр ине. Ҫубый ҡатындарының генетик хәтерҙәрендә һаҡланған ынйы-мәрйенгә һөйөүе генә лә күп нәмә тураһында һөйләй. Уларға алтын кәрәк булмаған, ләкин иң фәҡирҙәренең дә муйынында — унарлаған мәрйен, түшелдектәренә нисәмә төрлө мәрйен сәйләндәр теҙелгән. Әлбиттә, заманында ниндәй Һыу тураһында һүҙ барғаны билдәле булған. Шулай уҡ боронғо шәжәрәләрҙә бөгөн ҡулланышта булмаған "төшлөк яғы" тигән һүҙ ҙә осрай. Мәүәраәннәһер исеменең һүҙлектәрҙә килтерелгән мәғәнәһе "Йылға аръяғындағы ер" тип бирелә. Ниндәй йылға, ниндәй һыу күҙ алдында тотолған был боронғо атамала? Мәҫәлән, меңдәрҙең Татарстан тарафтарында ҡалған нәҫелдәрендә хатта бөгөн дә Сырдарья тигән ҡатын-ҡыҙ исеме осрай.

Ә.З.Әсфәндиәров үҙенең “Башкирские тарханы” китабында мең Һубыйҙарын берләштергән улустарҙың рәсми исемдәрен килтерә:

1. Яйыҡ Һубый тоҡомо рәсми документтарҙа — Яик Су-би Минская,
2. Ҡадир Һубый тоҡомо — Бегеняш Су-би Минская,
3. Иҙел Һубый тоҡомо — Слю-Минская,
4. Меңле Һубый тоҡомо — Кулили-Минская.

Иҙеүкәй-Чублек тоҡомон тарихи күҙлектән тикшерһәк, Яйыҡ һәм Иҙел Һубыйҙар мең ырыуының иң боронғоларынан булып, Иҙеүкәй, Яйыҡ батыр, Мораҙым, Кәләйле, Туҡтар, Ҡаҙанфәр исемдәре аҫтында тупланған ҡәүемдәр — уларҙың дауамы, ә ҡалғандары тарих барышында Һубыйҙарға ҡушылған ҡәүемдәр икәнен күҙаллап була. Ошолар эсендә Иҙеүкәйҙең боронғо шәжәрәһендә аталған Ҡаҙансы тоҡомдарынан Ҡәҙерҡыя ҡәүеме Ҡадир Һубый атамаһын алған, тип әйтергә нигеҙ бар. Быны өҫтәмә эҙләнеүҙәр менән дәлилләп буласаҡ. Ҡадир Һубыйҙарҙың дөйөм рәсми исеме документтарҙа Бигәнәш-Һубыйҙар тип аталған. Иртәк хәбәрҙәрен иҫәпкә алһаҡ, улар Иҙеү вариҫы Мораҙым бейлегенә күскән ҡәүемдәр булыуы мөмкин. 1795 йылда был улустың исеме һаҡланған һәм өс ауыл иҫәпкә ингән. Ошо Бигәнәш исеменә бәйле бер фараз урынлы һымаҡ. Был исем Нөгөш атамаһына бик яҡын, ғәрәп графикаһында тик бер нөктә менән генә билдәләнгән “Н” хәрефе иғтибарҙан ситтә ҡалыу ихтималы бар һәм Бигәнәш атамаһы, Нөгөш Һубыйҙарының ысын исеме булып, боҙолған шәкелдә рәсми ҡағыҙҙарға инеп китеүе мөмкин. Ошо фараз хаҡлыҡҡа тура килһә, меңдәр шәжәрәһе һәм рәсми документтар “Урал батыр” эпосы батырҙары Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш исемдәрен өс Һыу ҡәүеменең тамырында мәңгеләштереп, һаҡлап алып ҡалған булып сыға. Башҡорт тарихын тикшергәндә был бик мөһим мәғлүмәт, урын-ер атамаһында ғына түгел, ә Баш Ҡорттоң ырыу атамаларында ла мәңгеләшкән был исемдәр беҙҙең халыҡты Урал батырға бәйләгән тарихи еп, тип ышаныслы әйтеп була.

Чублектең аҙаҡҡы ике улус исеме урыҫ телле документтарҙа үҙ шәкеленән ныҡ айырыла. Рус теленә “Слю-Минская” итеп тәржемәләнгән улус исеменең үҙ телебеҙҙә яңғырауы Һыулы (Сыулы, Сулы) Мең булһа, Кулили-Минская атамаһында мәғәнәүи яҡтан да боҙолоу күренә. Был атама Кәләйле батыр исемен рус теленә ошо шәкелдә тәржемә итеүҙән барлыҡҡа килгән. Бында иртәк мәғлүмәттәрен дәлил итеп алырға була. Иҙеүкәйҙең яуҙашы, ҡулдашы Кәләйле батыр исеме үҙ ваҡытында киң билдәле булған. Иртәктә яҙыла: “Кәләйле Дим башынан килеп, Дәмми бейгә ҡаршы һуғышҡан. Ыршаҡ бейҙе еңгәс, Илеүкәй Кәләйлегә ярҙамға барып, икәүләшеп Дәмми бейҙе еңгәндәр. Шунан үҙ-араһы ерҙе бүлешеп, Дим буйына һәр ҡайһыһы үҙ ҡул аҫтындағы йөҙ башлыҡтарын ауыл-ауыл итеп ултыртҡандар. Дим башынан алып Кәләйле бейҙең меңдәре: Сафар, Туҡһанбай, Аҙнай, Биҡкол, Ҡасҡын, Ҡаныҡай тигән йөҙ башлыҡтары ултырған. Ул йөҙ башлыҡтары исеменә ауылдар аталып, ошо көндә лә улар Кәләйле меңе тип йөрөтөлә. Улар Бишбүләк, Миәкә районДарында йәшәйҙәр” (БХИ, 8-се том, 106-сы бит). Ошонан сығып, Кәләйле батыр ҡәүемдәре Һубый меңдәргә ҡушылған йәнә бер тоҡом булған, тип фаразларға була.

Кәләйле батырҙың исеме шәжәрәләрҙә бар, ул Киляй шәкеле менән бирелә һәм үҙ асылына яҡын. Киляй батырҙың дауамы — Субак. Был Һыу бәк — Һу бей исеменең тағы бер варианты, шәжәрәләрҙә Муса бейҙең дә Бикмуш тип аталыуын күҙ алдында тотҡанда, борон мең башҡорттарында “бей” һәм “бәк” һүҙҙәре бер

үк мәғәнәләге титул атамаһы булғаны күренеп тора. Иртәктә, мәҫәлән, Иҙеүҙең Сытмыр ҡыҙы Фирҙәүестән Әлбәк исемле улы булыуы әйтелә.

Ошо уҡ Субак атамаһы себер шыбандарының исемдәрендә лә осрай. Мәҫәлән, З.Вәлиди Чувак исеме менән шыбандарҙың бик күп әхүәлдәрен яҙып үтә. Шулай итеп, Ҡеләйле батыр биләмәләре боҙолған шәкелдә булһа ла, Ҫубый меңдәр ҡәүеме итеп күрһәтелеүе дөрөҫ булып сыға. Уның дауамын Бүләр улусы шәжәрәләрендә күреп була. Бына ошо әхүәл әйтеп үтелгән Эрзендың ер бүлеү ғәмәленә тағы ла ишара яһай, уртаҡ тамырҙар ниндәй ҙур майҙандарҙа таралғаны күренә.

Ә бына улус атамаһында Ҡеләйле батырҙың исеме юҡҡа сығып, бөгөн был атама хатта үҙ телебеҙҙә лә Ҡүл иле булып йөрөй. 1795 йыл мәғлүмәттәрендә улусҡа ун бер ауыл ингән, өҫтә килтерелгән ауылдар бөтәһе лә ошо исемлектә.

Бер аҙ ситкә кителһә лә, ыңғайҙан бик боронғо Яйыҡ-ҫубый ауылдарының береһе, һуңыраҡ типтәрҙәр килеп урынлашҡан Әлшәй районының Торонтайыш ауылын телгә алып китәһе килә. Иртәктә яҙылғанса, “Ҡош тырнағы теймәгән, күк ыласын типмәгән” ҫубыйҙарҙың ырыу ҡошо Торомтай исемен йөрөткән был ауылдың атамаһы бер ни тиклем үҙгәргән хәлдә бөгөн өҫтә күрһәтелгән шәкелдә яҙылып йөрөй, ысынбарлыҡта уның боронғо исеме Торомтайҡ(ғ)ош булған. Был ауыл эргәһендә, йәнә боронғо тамырҙарына ишара ҡылып, Дәүрә(н) ауылы йәшәп ята. Урындағы халыҡ телендә ул ошо исем менән йөрөй, рәсми исеме — Фән. Иртәктә ошондай юлдар бар: “Баба Ғөмәр атайҙан, әүлиә Төкләҫ бабайҙан дәүрән ғүмер һорарбыҙ!” Хәҙер ҡулланышта фәҡәт ауыл исемендә ҡалған һүҙ борон ниндәй тәрән мәғәнә менән ҡулланылғаны күренеп тора. Шул уҡ ваҡытта был атамалар меңдәрҙе туранан-тура Иҙеүкәй шәхесе менән бәйләй. Иҙеүкәй һәм Мораҙым иртәгенең башҡа нурлы ярсыҡтары ла халыҡ телендә һаҡланып ҡалған әле. Мәҫәлән, беҙҙең яҡтарҙа шыма телле, һүҙгә оҫта кешеләрҙе “Ҫабрау!” (Һабрау, Шабрау) ораны менән дәртләндереү ғәмәле бар ине. Мәкәштә һуңғы тапҡыр был һүҙҙе мин Солтанова Минзифа әбей адресына әйтелгәндә ишеттем. Ә күпме онотолоп барған атамалар, өйрәнелмәгән орандар һәм лөғәттәр һаҡлана әле Илеүкәй илендә.

Чублек тоҡомдарынан булған ҫубыйҙарҙың өҫтә аталған дүрт тоҡомо менән бер рәттән Ҡаҙанфәрҙең бер тоҡомо ла Ҫубый булып теркәлгәне өҫтә яҙылды, был — Худайбакты тоҡомо. Бына ошо Худайбакты тоҡомонан булған Янбакты меңдәр шәжәрәһенең бер өлөшөн теркәп ҡалдырған да инде.

Ҡаҙанфәрҙең икенсе тармағы шәжәрәләрҙә Куджабакты тип тәржемәләнә, Ә.З.Әсфәндиәров уны Козябахты тип яҙа. Был атама үҙ асылына яҡын булып, Урмандарҙың Көҙәй тармағына ишара. Куджабакты ҡәүемен берләштергән улус “Минская” тип аталған. Шулай уҡ Урман тармағынан булған Үрәҙ бей, күрәһең, ошо көҙәйҙәр менән, йә булмаһа илеүкәйҙәр менән берләшеп китә, сөнки Ә.З.Әсфәндиәров яҙа: “Полное название 9-го рода минцев Уразлы Урманова установить не удалось”. Бында бер генә нәмә бәхәсһеҙ — был тарафтарҙа, үҙ тарихи Ватанында бик борондан тамыр йәйгән меңдәр булған улар, һәм Ҡаҙанфәргә — Хоҙайбирҙенең вариҫына ҡушылып, үҙ заманында нуғайҙар менән китмәйенсә, ғәзиз Ватанында ҡалған башҡорт меңдәре булған. Куджабакты (Козябахты) ҡәүеме тамырҙары менән бер генә тоҡомдан тормағаны күренә, сөнки өҫтә әйтелгән йомран-табын шәжәрәләрендә лә ошо Куджабакты тоҡомонан киткән ике нәҫел бар: Айкембирҙе һәм Куджамбирҙе. Шәжәрәләрҙәге

был мәғлүмәт З.Вәлидиҙең өҫтә килтерелгән фаразын ҡеүәтләй: “Во время Урус-мирзы родом табын управлял Бурнак-бий”. Был хәбәр — Бурнаҡ һәм Ҡаҙанфәр бер шәхес булғанын күрһәтеүсе тағы бер дәлил. Табын бейҙәренең “Олуғ Мең ырыуынан ефетләнеп” ғүмер итеүҙәрен М.Өмөтбаев та билдәләп үтә. Тимәк, Үҙәк Башҡортостанда табындар ҙа Ҡаҙанфәр-Бурнаҡ бейлегендә булғандар.

Айкембирҙе исеме Юрматы шәжәрәләренә Аҡтамбирҙе шәкеле менән инеп киткән. Бына ошо нәҫелдән беҙҙең ауылда мәңгеләшеп ҡалған Мәкәш батыр һәм Туҡтар батыр исеме килә. Йомран-табындарҙа Айкембирҙенең Ҡунҡаҫ һәм Байсункар нәҫелдәре күренә. Был исемдәр ҙә беҙҙең тарафтарҙа мәңгеләшкән Шоңҡар (Байсункар) һәм Айҡым тигән урын-ер атамаларында һаҡланған, улар Ташлы ауылы биләмәләренә инә. Әлшәй районында Ҡунҡаҫ ауылы бар, Бәләбәй районындағы Серафимовка ҡасабаһының боронғо исеме — Ҡунҡаҫ. Ҡунҡаҫ бейҙең юрматыларҙа ла тоҡомдары булғанлығы асыҡ күренә. Ләкин улар Юрматы бей тоҡомо итеп бирелһә лә, “отец их кто?” тигән һорау был тоҡомдарҙың тамыры юрматыларҙа билгеле түгел икәнен күрһәтә. Мәкәш батырҙың да исеме табын, юрматы, ҡыпсаҡтарҙа аталып ҡына китә һәм унан киткән быуындар күренмәй, фәҡәт беҙҙең ауылдың йылға исемендә Тегәнәк булып һаҡланған уның Тебянек (русса) исемле бер улы ғына Юрматы шәжәрәләрендә килтерелгән. Ләкин Мәкәш олатайҙың беҙҙең ауыл тоҡомдарында килеп сыҡҡан тамыры уның Илеүкәй-меңдәрҙән Урман нәҫеле булыуын күрһәтә, был фараз архив материалдары менән дә иҫбатлана.

Ҡаҙанфәр бейҙең Куджамбирҙе нәҫеле лә күп шәжәрәләргә инеп киткән: йомрандарҙың, тамъяндарҙың һәм, Субак нәҫеле булып, Бүләр улусында уның тоҡомдары күренә.

Ҡаҙанфәрҙең йәнә ике тоҡомо (шәжәрәләрҙә улы тип бирелә), дөрөҫөрәге, уға ҡушылған мең башҡорттарынан Дистандыҡы — Һарайлы (Һарылы) меңдәр һәм Кадаштыҡы — Өршәк меңдәр булып тарих биттәренә инеп киткән. Картала (“Расселение западных башкир”) Һарайлы меңдәрҙең биләмәләре Байлар улусында күренә, ә Үҙәк Башҡортостанда тороп ҡалған биләмәләр “Дистан Субе Мен” исемен алған. Мең ҡәүеменең таралған ареалы ифрат киң майҙандарҙа булып, тарих барышында улар тарҡалып, айырым улустарға бүленеп бөткән. Башҡорт халыҡ ижадында, меңдәр ерҙәрен бүлгән дә бүлгән, бүлә торғас, бер ҡәүеме ерһеҙ ҡалған, тип яҙылған. Улар ҡобауҙар булған. Меңдәрҙең боронғо тамырҙары, ер-һыу атамалары боронғо Бүләр, Байлар, Юрми улустарында килеп сыға. Был тарафтар башлыса бөгөнгө Татарстан Республикаһы эсендә тороп ҡалған. Мең ырыуы ерҙәре бүленеп, ареалдары ныҡ тарайған. Ул ғына ла түгел, боронғо меңдәр, бигерәк тә уларҙың ҫубый диалектында һөйләшкән өлөшө, бөгөнгө көндә татар әҙәби теле тип иҫәпләнгән телгә бик еңел күскән, ә Оло Башҡортостандың көнбайыш өлөшөнән Үҙәк Башҡортостанға күскән типтәрҙәрҙең күбеһе күп тә үтмәй татар булып иҫәпләнеп киткән.

Өршәк-меңдәрҙең Ҡаҙанфәр ҡәүемдәренә барып тоташыуы ошо тоҡомдарҙың бөтәһе лә Иҙеүкәй ҡул аҫтында булғанын күрһәтә. Быға иртәктән дәлил табып була. Унда, өҫтә әйтелгәнсә, Иҙеүкәйҙең башҡа батырҙар менән Дим буйында йәшәгән Ыршаҡ бей һәм Дәмми бейгә яу асып, еңгәндән һуң ерҙәрен үҙ-ара бүлешеүҙәре хикәйәләнә. Әммә Ыршаҡ бей Келәйле менән берләшкән Иҙеүкәйҙең еңеүле яуын күргәс, был ҡотолғоһоҙ хәлдә үҙе теләп Иҙеүкәйгә баш һала һәм Иҙеүкәй: “Башыңды ла әйеп килгәнһең, — тиеп бейҙе ҡотҡарған,

батырҙарын баш ҡылып, күп көн шунда уҙғарған". Тимәк, Иҙеүҙең ҡулдашы булып киткән Ыршаҡ бейҙең ерҙәре тарихи исемен юғалтмаған һәм заманында башҡа Мең ҡәүемдәре менән бергә Ҡаҙанфәр ҡәүеме эсендә ерҙәрҙе рәсми теркәүҙә ҡатнаша алған. Был сығанаҡтар хәҡиҡәткә яҡын булып, беҙгә ошо дәлилде төҙөргә нигеҙ бирә: Баба Төкләҫ, Сәсле дәрүиш, ул уҡ Сәсбуға, шәжәрәлә аталған уның ҡыҙы Уҡа әбей һәм Мюркюнджан (меңдәрҙә Сангусин исеме бар) исеме менән билдәләнгән нәҫелдең уртаҡ балаһы Хоҙайбирҙе-Ҡаҙансының тоҡомдары улар — Иҙеүкәй, Мораҙым, уның тоҡомо Ҡаҙанфәр-Бурнаҡ. Был мәшһүр башҡорт бейе өҫтә күрһәтелгән дүрт тоҡомдоң: береһе — Ҡаҙанфәрҙең үҙенең тоҡомдарын (Чу-би) һәм өсөһө — меңдәрҙең башҡа ҡәүемдәрен бер күс итеп туплап, бөтәһе бергә дүрт тоҡомдоң башы булып, мең шәжәрәләрендә сағылыш тапҡан. Ошо дүрт тоҡом Ҡаҙанфәр исеме аҫтында 1671 йылда мең ырыуының ерҙәрен теркәүҙә ҡатнашҡан да инде. Тимәк, Ҡаҙанфәр үҙ заманы өсөн башҡорт ырыуҙары эсендә киң билдәле, ваҡиғалар уртаһында ҡайнашҡан шәхес кенә түгел, Үҙәк Башҡортостанда бик күп тармаҡлы ҡәүемдәрҙе үҙ ҡул аҫтына туплап, тотош мең ырыуының артабанғы тереклегенә ифрат ҙур йоғонто яһаған тарихи шәхес, юлбашсы, тоҡом башы була.

Әгәр Бурнаҡ бей һәм Ҡаҙанфәр икеһе лә бер шәхес икән, был, ысынлап та, Мораҙымдан киткән тармаҡ булып сыға. Мораҙымдың беҙгә билдәле ике улының береһе Ҡаҙанҡап Бурнаҡ исеме менән бер бәйләмдә һөйләнгән булғас, ул ошо тармаҡ вариҫы булып сыға. Өҫтә килтерелгән Сәсле сылбырын Ҡаҙансы быуынынан дауам итһәк: Ҡаҙансы — Ҡотло — Иҙеүкәй — Мораҙым — Ҡаҙанҡап — Бурнаҡ (Ҡаҙанфәр). Алтынсы быуын әле етеят түгел, шуға ла был затлы нәҫел балаһын Ҫубыйҙар Ҡаҙанфәрзәнде тип атаған, ә тоҡомон үҙ ҡәүеменә беркетер өсөн бер хикмәт белгән кеше, йола тылсымын файҙаланып, уны Бурнаҡ тип тә атаған. Ошо йоланы атҡарыусы Сәсле дәрүиш тоҡомо Мораҙым үҙе булып сыға.

Иҙеүкәй бөтә сығанаҡтарҙа ла Сәсле нәҫеленән тип күрһәтелә, Сәсленең атаһы "Шейх-дервиш" тип йөрөтөлөүен шәжәрәләр ҙә, иртәк тә бер телдән һөйләй. Шейх-дервиш исеме Байлар волосы шәжәрәһендә Урдач-баба (Урҙас) сылбырында килтерелә (326-сы бит). Йәнә, юрматылар шәжәрәһендә лә Шейх-дервиш тураһында мәғлүмәт бирелә: "Шейх, сын Гюджлюка, называемый Шейх-дервиш, стал великим бием. Юрт пребывал в покое. Когда Шейх-дервиш покинул этот мир, бийство перешло к сыну бия, Чачлы-дервишу и на бийство его было дано согласие. Стал он великим бием".

Ғөмүмән, Сәсле дәрүиштән киткән башҡорт тоҡомдары айырым өйрәнеүгә лайыҡ. Бында бик күп фекер айырмалыҡтары күҙәтелә. Ошо айҡанлы "Башҡорт халыҡ ижады"нан (8-се том, 403-сө бит) килтерелгән аңлатманан цитата: "Башҡортостанға беренсе килеп ултырған Нуғай хандың исеме Төкләҫ, Түрә Ҡылыс йәки Түрә баба Төкләсеү тип йөрөтөлгән. Ул хәҙерге иҫке Өфө янындағы Чертово городищела йәшәгән һәм крепость-ҡорғаны ла булған..." Икенсе бер мәғлүмәттә Чертово городище хәҙерге Бөрө ҡалаһы янында урынлашҡан булған, тигән фараз да бар.

Ошо мәғлүмәт менән бергә беҙ шәжәрәләрҙәге хикәйәттәрҙе лә иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Юрматы шәжәрәләрендә уҡыйбыҙ: "...остановились по течению источника, называемого "Кара Елга" (Черная речка). Начали искать и увидели надмогильный камень. На камне было написано "Чюлькя-ата". Хан (Амат Хамат — шежере) сказал: "Очевидно, это и есть их святой!" Әҙ генә аҫтараҡ

был исем “Чечюлькя-ата” тип бирелә. Ваҡытын шәжәрә 1408—1409 йылдар менән билдәләй. Был исем Сәсле (Чачлы варианты ла бар) исеменә бик яҡын. “Их святой” тигән һүҙ ҙә иғтибарға лайыҡ. Тимәк, был шәхес, ысынлап та, тирә-яҡта киң билдәле була. Әлбиттә, бик күп эҙләнеүҙәр кәрәк буласаҡ, иң тәүҙә боронғо атамаларҙың урындарын билдәләү зарур. Мәҫәлән, ошо ыңғайҙа беҙҙең тарафтарҙа ла ошоға оҡшаш атама барлығын билдәләп китергә була. Берҡаҙан ҡамышлыҡтарында Ҡара ҡойо тип аталған шишмә бар. Халыҡтың әле лә бик ололап, хөрмәтләп йөрөткән был һыу сығанағының хәҙер инде һуҡмаҡтары юйылып бөткән, урынын тапҡырлап ҡына табып була. Ә элегерәк мәкәштәр был шишмәнән мөмкин тиклем күберәк файҙаланырға тырышҡан, уның һыуы шифалы иҫәпләнгән.

Икенсенән, Чюлькя-атаның ҡәберлеге асылған булыуына туранан-тура ишара бар, сөнки шәжәрә яҙа: “Когда осмотрели могилу, то увидели, что она выложена кирпичом. И вот что удивительно: черноволосый молодой человек лежит в ней как живой”. Ошо урында урыҫ телендә һаҡланған иртәк вариантының дауамын килтереү урынлы һымаҡ: “...Когда родился сын, то его из подводного царства выбросили на землю. Баба Тукляс нашел его и взял к себе. Дали имя “Идюка”. Баба Тукляс обучил его и умер...” Күрәһең, Төкләҫ Иҙеүҙе күрәҙәлек хикмәттәренә өйрәтә, был текстан беҙ Бабаның йәш килеш вафат булғанын да аңлайбыҙ. Бында “молодой, черноволосый” Чечюлька-ата Төкләҫ баба үҙе булған, тип фаразларға нигеҙ бар. Боронғо башҡорттарҙа (был әхүәл ҡаңлыларҙа киң таралған булыуы риүәйәттәрҙә һаҡланған), ысынлап та, ҡәберлектәрҙе асыу ғәмәле булған. Әгәр ҙә шәжәрә күрһәткән атаманың (“река Шадлык”) урынын тапҡанда, был хәлдәрҙең асылына төшөнөп булыр ине, сөнки хан ерҙәре булған Баштирмә ауылы тарафтары Мәкәшкә бик яҡын урынлашҡан. Унан ҡала, Мораҙымдың исемдәренең береһе Норадын булыуын иҫәпләгәндә, был Асылыкүлдең Нора тауына ишаралаған исеме булып, уның тыуған урынына төбәп, Нораҙан, тип күрһәтеп тороуы ла мөмкин. Ғәнәкәнең Мораҙымды ҡамышлыҡтарҙа табыуы тураһында әйтелгәйне инде. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Берҡаҙан атамаһын, “ҡамыш” һүҙен ҡушып, Берҡаҙан Ҡамыш тип йөрөтөрҙәр ине.

Шәжәрәнән хикәйәтте дауам итәбеҙ (54-се бит): “На могиле святого Шагали-бий возвел стены, и каждый год, собираясь (у нее), устраивали поминки”. Бында бик күп иҫкәрмәләр бар, ләкин улар 1961 йылда сыҡҡан башҡорт телендәге шәжәрә китабында ҡушымта итеп бирелмәй ҡалған һәм шунлыҡтан руссаһында ла юҡ. Шәжәрә мәғлүмәттәрендә аңлашылмаған өҙөклөктәр килеп сыға, шунан һәр кем үҙенсә тәфсир ҡыла башлай һәм тарихи хаҡлыҡ юғалыуға юл асыла.

“Шагали-бий возвел стены” мәғлүмәте бик мөһим мәғәнә һаҡлаған кеүек күренә, был беҙҙең бөгөнгө телдә “стена” тип тәржемәләнгән һүҙ нөсхәлә нисек булғандыр, әммә был һүҙ Түрә хан ҡәберлегенә алып барған һымаҡ. Юрматылар шәжәрәһе тағы ла яҙа: “...долго они там жили, и Шагали-бий покинул этот мир, похоронили его рядом с Чечюлькя-ата”. Бына ошолай хан тоҡомдары айырым урында дәфенләнеп, хандар ҡәберлеге барлыҡҡа килгәндер ҙә. З.Вәлиди ҙә яҙа: “...у Али-хана на Яике у переправы Жан Сюйюк умер сын. Он предал его земле вблизи Уфы, в месте захоронения ханов”. Ошо мәғлүмәттәргә таянып, Чечюлькя-ата ла ошо хандар өсөн тәғәйенләнгән махсус ҡәберлектә ерләнгән булыуы мөмкин. Чечюлька-ата тигәнен башҡорттар яратып-һөйөп Сәслекәй тип йөрөткәндәр, моғайын.

“Иҙеүкәй һәм Мораҙым” иртәге Төкләç баба тураһында тулы ғына мәғлүмәт бирә һәм уның шәхесенә бәйләп ҡылыс тураһында ла һүҙ алып бара. Иртәктән өҙөк: “Баба Төкләç әүлиә Алла менән серләште. Уралда тыуған бер батыр ил һаҡларҙай булмаған, Урал батыр ҡылысын тотор батыр тыумаған, ҡайҙа ятҡан урынын һис берәүгә әйтмәне”. Ошо уҡ ҡылыс тураһында иртәктән йәнә бер өҙөк: “Тоҡомомдан берәүһе ошо китапҡа юлығыр. Үмәр батырҙан ҡалған булатымды тапһа ул, ниндәй яуҙар килһә лә, бөтәһене айҡар ул”. Бында Урал батыр ҡылысының (әлбиттә, метафора) хужаһы (Ғ)Үмәр батыр икәнен беләбеҙ (“Иҙеүкәй һәм Мораҙым”. Өфө. Китап. 1994, 150-се бит). Ул икенсе урында Үмәр ҡашҡа тип тә атала. Ҡылыс тураһында йәнә иртәктән мәғлүмәт: “Минең Сытмыр яһаған ҡылысымды үҙеңә ал. Күп яуҙарҙа йөрөткән, һине Иҙеүкәй таныҡкан булат ҡылысың аямай, ҡомартҡы итеп миңә һал!” (иртәктән, 208-се бит). Ә бына 237-се биттә Үмәр батырҙағы ҡылыс Иҙел батыр ҡылысы булыуы әйтелә һәм: “Үмәр-батыр булған, ти, күҙ йәштәрен күптәрҙең булат менән һөрткән, ти. Был Үмәрҙең бер улы — Ғәзиз әүлиә булған. Анан тағы әүлиә — Баба Төкләç тыуған, ти. Атанан балаға буты (ҡылыс) — ҡомартҡы булып килгән, ти. Баба Төкләçтән тороп Тора бейгә ҡалған һуң”.

Иртәктә килтерелгән өс быуын әүлиәләр тармағының башы (Ғ)Үмәр баба Урал батыр ҡылысының мифик хужаһы булып, был ҡылыстың быуындан быуынға күсеүе мифология ярҙамында бирелһә лә, ул ниндәйҙер символик Баш Ҡорт ҡылысы булып төçмөрләнә, шуға ла Төкләç баба Түрә ҡылыс атамаһын йөрөткән. Ҡылыслы түрә булыуҙың мәғәнәһен дә, әһәмиәтен дә беҙ бөгөн аңлай алмайбыҙ. Бындай ҡомартҡыны һаҡлаған тоҡом фәҡәт Баш Ҡорт тоҡомо була алған. Әгәр Шейх-дервиш-баба шәжәрәлә Урдас-баба тоҡомонан итеп күрһәтелә икән, Урдас үҙе лә “Тысячеколчанный” исемен йөрөткәнде иçәпләһәк, был шәхестәр бик боронғо ҡылыслы ҡәүем вәкилдәре булған, тимәк. Иҙеүкәйҙең улы Мораҙымға әйткән һүҙҙәре ниндәй ҙур мәғәнә һаҡлай: “Атамдың ҡонон юллап, Тора бейгә килгәндә, миңә ул саҡ ни бары ун биш кенә йәш булғанда, Тора бейҙең ҡулынан йыға һелкеп алған һуң, миндә ҡалған ҡылыс был! Батыр улым Мораҙым, бына ошо ҡоралым инде һиңә бирәйем”. Тора бей иртәктә үҙенең тоҡомона хыянат иткән шәхес булып күҙаллана, шуға ул халыҡ булмышында был ҡоралға лайыҡ түгел шәхес тип иçәпләнгән һәм иртәк беҙгә ошо хәбәрҙе еткерә. Иҙел батыр ҡылысы атанан балаға мираç булып күсеү ғәмәле дауам ителеп, был әхүәл ошо ҡылыслы ҡәүемдең Иҙел Батыр тоҡомонан икәнлеккә ишара булып тора. Бына ошоға нигеҙләнеп, Иҙеүкәйҙе Иҙел һыу буйы меңдәренән булған, тип фаразларға була. Быуындан быуынға күскән, хатта Сытмыр ҡулына эләкмәгән, “Мең йыл үҙ батырын көтөп ятҡан буты” — ҡомартҡы Ҡылыс — Баш Ҡорттоң ҡомартҡыһы булған.

Ғалимдар урыç телендә бер үк шәкелдә яңғыраған башҡорт һүҙҙәренең төрлөсә тәфсирҙәрен бирә. Рус телендә бер үк яңғырашта — Тура булып ҡулланылған һүҙҙәр башҡорт телендә төрлө мәғәнәлә бирелә. Түрә (хаким, чиновник) бөгөн дә ифрат киң ҡулланышта йөрөй, ошо мәғәнә менән Түрә Ҡылыс, Түрә Баба, Түрә Төкләç, Түрә хан исеме килтерелеүе мөмкин. Тора һүҙе — кеше исеме. Тура — ил исеме. Урыç телендә башҡорт тарихын яҙған ғалимдар бында күп фекер айырмалыҡтары ебәрәләр. Әгәр башҡорт “Түрә Ҡылыс” тип әйтә икән, бында иң алда был шәхестең беҙҙең бөгөнгө тел менән әйткәндә — начальник (бей), хаким булыуы күҙ алдында тотола һәм быны ошо күҙлектән сығып аңларға

кәрәк. Был кеше — ҡылысслы түрә. Ул ваҡыттағы ҡәүемдәрҙең телмәрендә ошо “түрә” һүҙе хакимлыҡ мәғәнәһен күҙ алдында тотоп, хөкөм сығарыу мәғәнәһе менән дә йөрөгән. Мәҫәлән, иртәктең татар вариантында “Түрәсен моның бир, диеп, ҡулын килеп ҡушырды”. Икенсе урында “Ул ни кылса рас кылған, Ҡобо-голдай баланың түрәсенә чыгалмам”. Беҙҙең бөгөнгө телмәрҙә беренсе осраҡта — “хөкөмөн бының бир”, ә икенсе осраҡта “уға хөкөмсө була алмайым” тигән шәкел ҡулланылыр ине.

Әгәр Тора хан тураһында һүҙ бара икән, ул реаль шәхес — иртәк уны Сәсленең кесе улы тип атай һәм тарихсылар уның биләмәләре Стәрлетамаҡ янында ла булған тип билдәләйҙәр, Торатау ҙа уның исеме менән аталып киткән тип фараз-лана. Хикмәт белгән Сәсле нәҫеле был балаға “тора”, “йәшәй”, “оҙон ғүмерле була” тигән мәғәнә менән исем ҡушырға мөмкин тип иҫәпләй. Күп ҡырғындар менән нәҫел кәмеү ҡурҡынысы булғанда, шундай оло мәғәнәле исемдәр ҙә был данлы шәхестәрҙең тылсымы булғандыр. Башҡорттоң бер үк нәҫел кешеләрен бер дөйөм атама менән атап йөрөтөү ғәҙәтен иҫәпкә алғанда, Тора бейҙең тоҡомдары ла ошо атама-көнйәне йөрөтөүе мөмкин.

Әгәр Тура хандары тураһында һүҙ бара икән, бында ерлек бөтөнләй икен-се. Тура иле Себер хандары хакимлығына төбәп әйтелгән атама, хәҙерге Омск ҡалаһы Тура йылғаһында урынлашҡанын беләбеҙ, тимәк, был урындар ошо йылғаның атамаһы менән бәйле булыуы мөмкин. Унан ҡала, Башҡортостандың үҙ тарафтарында ла Тура (Туры) исемле йылға булыуы билдәле. Ш.Н.Иҫәнғоловтың мәҡәләһендә, Тора хан Себер ханы Күсем менән талашып, Өфө тирәһенә күсенә, аҙаҡ Ыҫлаҡ йылғаһы буйында һарай менән мәсет төҙөтә, тигән мәғлүмәт бар. Был текста Күсемдең улы ла Тора хан тип билдәләнә, бына был осраҡта инде был шәхес, Күсем улы — Тура иленең ханы булыуы логикаға һыя, ә Ыҫлаҡ буйында һарай төҙөткән Тора хан Төкләҫ тоҡомонан булып, әлбиттә, ул Өфөнән киткәс, үҙенең боронғо ата-бабаларының биләмәләрендә — хан ерҙәрендә, хан урҙаһында һыйыныр урын тапҡан. Был да логикаға һыя торған фараз. Әйтелгән Ыҫлаҡ йылғаһы хәҙерге Благовар районы ерҙәренән аға, өҫтә күрһәтелгән Тирмә ауылы ошо йылға буйында урынлашҡан. Ыҫлаҡ йылғаһы хәҙерге Әлшәй районында ла бар, был йылға буйында ике ҙур ауыл урынлашҡан: береһе, сыуаш ауылы Ыҫлаҡбаш, Бәләбәй районына инә, икенсеһе (Ыҫлаҡ ауылы) — Әлшәй районында. Ошо Ыҫлаҡ ауылы тирәләре лә үҙ заманында хан ере тип аталған, һуңыраҡ, ул биләмәләрҙә ауылдар барлыҡҡа килгәс, был тарафтарҙың тарихи атамаһы һаҡланып ҡалған әле. Ыҫлаҡтан дүрт-биш саҡрым тирәһендә Хәнйәр ауылы урынлашҡан, урындағы типтәрҙәр уны Хәнжәр тип йөрөткән. Совет власының хан-тархандарҙы өнәмәгән сәйәсәте арҡаһында был ауыл шулай атала башлаған, ә хәҙер инде бөтөнләй бер ниндәй мәғәнәһе булмаған Хәнйәр (Ханжарово) булып киткән, ысынбарлыҡта был ауылдың боронғо исеме Хан ере, быны үҙебеҙҙең ауыл кешеләренән ишеткәнем булды. Мин үҫкәндә өлкәндәр, Хан еренә барабыҙ тип, ағасҡа китерҙәр ине. Тимәк, оло быуын был тарафтарҙың тарихи атамаһын һаман да телдән төшөрмәй килгән. Был урындар ҙа Тора хандың ҡышлаған урыны — ҡышлағы булып, ҡышлаҡ һүҙе ҫубыйҙар диалектында Ыҫлаҡҡа әйләнеп, тирмәләр төтөнлө, ыҫлы булып та был һүҙ ғәмәлгә инеп киткәндер. Был урындарҙы Тора хан Тирмә тарафтарынан Стәрле яҡтарына йүнәлеш алғас, ҡышлаҡ итеп файҙаланыуы мөмкин, сөнки Әлшәй Ыҫлағы ошо йүнәлештең ҡап урталығында урынлашҡан. Һүҙ ыңғайында шуны ла

әйтеп китергә кәрәк, был урындар, ысынлап та, хандар төбәге, хандар ҡышлағы булыуы урындағы халыҡ хәтерендә лә һаҡланған. Күренекле ғалим Рәшит Шәкүр әйтеүенсә, Әлшәй Ыҫлағынан көнбайыштараҡ ятҡан Кәркәле ауылы тарафтары Ҡаҙанфәр бей торлағы булыуы тураһында ла мәғлүмәттәр бар.

Баба Төкләҫтең сығышы Ш.Н.Иҫәнғоловтың "Урта быуаттарҙағы Башҡортостан тарихынан" йыйынтығындағы мәҡәләлә тикшерелә. Иртәк менән был хеҙмәттә килтерелгән Төкләҫ шәжәрәһен сағыштырғанда, уртаҡ мәғлүмәттәр ярылып ята. Тексын килтереп тормайынса, был мәҡәләләге шәжәрә сылбыры өҫтә күрһәтелде. Бында һаналған бейҙәрҙең исемдәре тағы башҡа сығанаҡтарҙа ла әйтелә. Башҡорт шәжәрәләрендә Сәсле дәрүиштең атаһы Шәйех дәрүиш булыуы әйтелә (54-се бит). Был шәхес бер осраҡта Ғәзиз әүлиә, Түрә Ҡылыс Төкләсеү тип, ә уның атаһы (F)Үмәр батыр тип килтерелеүе мөмкин. Һуңғыһы был шәхестең ысын исеме, ә ҡалған исемдәр көнйә, йә булмаһа нәҫел исеме һымаҡ күренә. Бына ошо логиканы фаразлау өсөн беҙгә меңлеләрҙең үҙ нәҫеленең исемен быуындар буйы бер исемгә бәйләп алып бара торған ғәмәлен онотмаҫҡа кәрәк. Бигерәк тә нәҫел билдәле тоҡомдан киткән осраҡта ҡушымта, йә булмаһа көнйә исем менән был нәҫелдең атамаһы һәр даим билгеләнеп килгән. Мәҫәлән, "Һуңғы һартай" хикәйәтенең геройы Ялыҡ атлы башҡорт үҙен "Ташҡай улы Бурнаҡтың улымын", тип билдәләй.

Әлбиттә, эпик хикәйәттәрҙе тарих сиктәренә ҡулайлаштырыу бик күп шартлы фараздарға алып килә, ләкин ошо урында З.Вәлиди китабындағы мәғлүмәтте килтереү урынлы булыр һымаҡ. 50-се бит: "Недалеко от Уфы в деревне Чишмы есть могила одного эмира по имени Хусейн-бек, скончавшийся в 1342 году...", ә 285-се биттә уҡыйбыҙ: "Этот надгробный камень был впервые прочитан... Здесь читается: "В своем правлении справедливый хаджи Хусейн-бек ибн аль-Эмир аль Кабир великий Гумер-бек ат-Тарбиат-Туркестани"... Был ҡәбер ташында Төкләҫ бабаның күп сығанаҡтарҙа күрһәтелгән олатаһы (F)Үмәр баба атала түгелме? Тимәк, Хөсәйен бәк ошо Үмәр бабаның тоҡомо булып сыға тип фаразларға нигеҙ бар.

Шәжәрә сылбырындағы Тирмә исеме менән теркәлгән шәхестең, һис шикһеҙ, ошо уҡ исем менән ауылы, торлаҡ урыны булған һәм ошо ҡәберлектең хәҙер ҙә үҙ исемен һаҡлаған Благовар районы Баш Тирмә ауылы эргәһендә урынлашыуы үҙе үк күрһәтеп тора — был кешеләр бер нәҫелдән булғандар. Бына ошо тарафтар бик борондан хандар ҡәберлеге һаналып, улар араһында ҡайһы бер шәхестәрҙең үҙ ваҡытындағы мәшһүрлегенә бәрәбәр төрбәләре булып, һуңынан да улар ҡәҙерләп һаҡланған, әлбиттә. Иртәк бер вариантында тиктәҫкә генә "Төкләҫ баба тирмәлә, йә Хоҙай, тип ятҡанда..." тигән юлдарҙы килтермәй. Был ғәрәп орфографияһы ҡанундарына ярашлы баш хәрефтәре булмаған ҡәләмдә бәләкәй хәреф менән яҙылған "тирмә" — баш һүҙ, торлаҡ, ҡышлаҡ урынының атамаһы булыуы мөмкин һәм бөгөнгө көн фиғеле менән беҙ уны тирмә — ҡыуыш тип кенә ғәмәлгә индергәнбеҙ. "Баба Төкләҫ Тирмәлә..." тип яҙғанда, мәғәнә үҙгәрә һәм был һүҙ үткән әхүәлдәр урынына күрһәткән хәбәр булып төҫмөрләнә.

Баба Төкләҫтең Өфөнө ташлап Ағиҙелдең икенсе яғына күсеүе тарихта билдәле бер ваҡиға булғас, был хәл шундай фаразға урын ҡалдыра: бөгөнгө Баш Тирмә ауылы Баба Төкләҫтең ҡышлау урыны ла булып, был урындар бик борондан хан ерҙәре була, тимәк. Ҡандракүлдең боронғо исеме Хандар күле икәнен дә беләбеҙ. Боронғо шәжәрәләрҙә килтерелгән Тирмә улы Ҡаҙансы

тоҡомоноң тереклеге бына ошо урындар менән бәйле булып, "Ҡаҙан" атамаһы Дим тамағына күрһәтеүе лә мөмкин. Нисә быуаттар элек был урындар һаҙмат, батҡылыҡлы урындар булыуын иҫбатларға ла кәрәкмәйҙер.

Баш Тирмә ауылы кешеләре үҙ тарафтарын Ҡаҙанфәр бейҙең тыуған урыны булған, тип фаразлайҙар. Был ауылдан йыраҡ түгел уның шәжәрәһен яҙған фәрзәнде Янбаҡты исеме менән аталған йылға һәм күл бар. Ҡаҙанфәр бейҙең Кадаш тоҡомдары Усман ауылына нигеҙ һалған тип иҫәпләнә, Дистан тоҡомдары нигеҙ һалған ауылдар Çарайлы (Çарылы) исемен йөрөткән һәм бер нисәгә еткән.

З.Вәлиди китабынан өҙөктө дауам итәбеҙ (50-се бит): "Здесь около деревни Тирме, прочитываемая на стене "Мавзолея Тура хана" дата показывает, что захоронение относится к 1482 году, то есть скончавшийся Тура-хан, имя которого нам неизвестно, умер в указанном году".

Был төрбәлә шәжәрәлә күрһәтелгән Чечюлька-ата ла ерләнгән булыуы мөмкин, мәгәр уның ҡәбере асылған булған икән. Был Тура (Түрә) хан Юрматы шәжәрәләрендә күрһәтелгән Шәғәли бей ҙә булыуы мөмкин: "который построил стену и... похоронен рядом с Чечюлькя-ата". Шәжәрә яҙа: "Долго они там жили..." Хатта бына ошо беҙҙең бөгөнгө телдә әйтелгән мавзолей, төрбә һүҙҙәре "Шагали-бей возвел стену" мәғлүмәтенә бәрәбәр, ошо мавзолейҙа бер нисә кеше ерләнгән булып, береһе Чечюлькя-ата, уға "стена" төҙөткән шәхес үҙе лә ошо стенаның (мавзолейҙың) эсендә, йә булмаһа "рядом с Чечюлькя-ата" ерләнеүе мөмкин. Археологик ҡаҙыныуҙар, ысынлап та, был төрбәлә бер нисә кеше ерләнеүен күрһәткән һәм улар араһында балалар ҙа булыуы билдәле. Был турала урындағы халыҡ һөйләй, башҡа сығанаҡтарҙы ла табырға була, бында өҫтәмә эҙләнеүҙәр талап ителә. Балалар ерләнеүе тағы ла бер фараз тыуҙыра: ә бит Иҙеүкәйҙең үлтерелгән ғаилә ағзалары ла ошонда ерләнеүе мөмкин, сөнки Иҙеүҙең Сәсбуға нәҫеле булыуы билдәле әхүәл, һәм был мәшһүр тоҡом ағзаларының Чечюлька-аталары менән бер төрбәлә ерләнеүе ихтимал.

З.Вәлиди үҙенең "История башкир" китабында ибн Фадлаллах аль Умари тигән тарихсыға һылтанмалар яһай. Был кешенең дә (вафаты 1348 йыл, "египтянин" тип билдәләнә) тәржемәи хәлендә Үмәр исеме бар. Бәлки, был шәхес тә өҫтә әйтелгән Үмәр баба уландарынан булып, Башҡорт иленең эске хәлдәрен урынында, үҙ нәҫелдәштәре араһында йәшәп, йә булмаһа уларҙан ишетеп-белеп үҙләштереүе мөмкин, быға нигеҙ итеп йәнә З.Вәлиди китабында килтерелгән мәғлүмәттәрҙе алып була. "Илмиддин Башкурд аль-Насыри был великим эмиром египтян в то время, когда они вели войну против ильханидов и умер в 1303 году" (З.Вәлиди, өҫтә күрһәтелгән сығанаҡ).

Меңдәрҙең Хоҙайбирҙе-Ҡаҙансы тоҡомдарының тереклеген барлағанда иғтибарҙы юрматылар шәжәрәһенән тағы ла бер тарихи йөмлә йәлеп итә: "Худайберди. Из ногайского народа. Имя его Казанчи. Приемный сын Юрматы бия" ("Башкирские родословные", 46-сы бит). Ә 50-се биттә уҡыйбыҙ: "Юрматы бий. Первый Юрматы бий. Отец его кто?" Бына ошо мәғлүмәттәр мең һәм юрматы ырыуҙарының уртаҡ тамырҙарын күрһәткән сығанаҡ ҡына түгел — улар өҫтәмә эҙләнеүҙәр талап иткән мәғлүмәттәр. Хоҙайбирҙене тәрбиәгә алған тоҡом башлығы Юрматы исеме менән бирелгән икән, был Сәсбуға — Сәсле дәрүиш үҙе булып сыға. Әммә бер урында шәжәрә яҙған башҡорт Юрматы бейҙең атаһын белмәгән булып сыға һәм, һорау ҡуйылып, ул яуапһыҙ килеш ҡалһа ла, икенсе урында был һорауға Юрматы шәжәрәләре яуап ҡалдырған: "Когда Шейх-дервиш

покинул этот мир, бийство перешло к сыну бия, Чачлы-дервишу. Стал он великим бием" (54-се бит). Мең ырыуы сығанаҡтарында Хоҙайбирҙенең Иҙеүкәй батыр тоҡомо икәнен иҫбатлаған дәлилдәрҙе күрҙек. Беҙгә Сәсле дәрүиштең ни сәбәпле Юрматы бей исеме менән аталғанын аңлау кәрәк. Йәнә шәжәрәләргә мөрәжәғәт итәбеҙ: "Наш предок Юрматы в знак верноподданства стал ловить диких зверей за голень. В ту пору не было таких, кто бы ловил зверей руками..." (67-се бит). Был мәғлүмәт Сәсле дәрүиш, Сәсбуға, Юрматы исемдәре менән билдәләнгән шәхестең мәшһүр хикмәт эйәһе булғанын күрһәтә. Был осраҡта шундай уҡ хикмәт эйәһе булған, исеме Инжилдә һәм Ҡөрьәндә телгә алынған Сөләймән пәйғәмбәр хәтергә килә. Сәсле дәрүиш йүрмәй белгән шәхес була. Башҡорт теленең был онотолоп бөткән һүҙе боронғо башҡортта күрәҙәсе, йүрмәүсе мәғәнәһе менән ҡулланылған тип уйларға була. Мәҫәлән, беҙҙең ауылда ошо һүҙҙе еп хикмәтен белгән кешеләрҙе маҡтар өсөн ҡулланалар ине. Тегергә, ямарға, төрлөептәрҙән йүрмәргә, туҡырға маһир оҫталарҙың эшенә һоҡланып, үрмәкес кеүек епте йүрмәй бит, тиҙәр ине. Типтәр ҡатындары араһында селтәрҙәрҙе ырғаҡ менән түгел, ә энә менән төйнәп бәйләү, йүрмәү ысулы бар ине беҙҙең ауылда. Шул уҡ ваҡытта был һүҙҙең тупаҫыраҡ шәкеле сихырсы, күрәҙәсе мәғәнәһендә лә ҡулланыла һәм шул уҡ үрмәкес образы ҡулланыла ине. "Үрмәкүс, үрмәкүс, йүрмәй, йүрмәй беҙҙән күс", тигән әйтем ҡулланып уны ҡыуалар, ләкин бер ваҡытта ла үрмәкесте үлтермәйҙәр, хатта шөрләйҙәр ине бер аҙ. Әгәр нисә быуат элгәре йәшәгән башҡорттоң фиғелен аңларға тырышып фекер йөрөтһәк, йыртҡыстарҙы йүрмәй белгән Сәсле дәрүиш үҙ ваҡытында Йүрмәй (Юрми) атамаһы менән дә йөрөтөлөүе мөмкин бит. Сәсән телле башҡортта метафоралы образдар ҡулланыу — ҡәҙимге телмәр өлгөһө. Бына ошолай Сәсле дәрүиш тағы бер атама менән халыҡ теленән тарихи майҙанға сыҡҡан булған, тип етди фаразларға була. "Йүрмәсе" һүҙенең "йүрмәте" ("юрматы") шәкеленә яҡын булыуын бик ябай аңлатып була: был тел диалектының бер өлгөһө. Бөгөн дә бик борондан килгән өндәр алмаштырыу ғәмәле телебеҙҙә һаҡланып ҡалған, мәҫәлән, күп урындарҙа "т" өнө "с" менән алмашып әйтелә, беҙ быны һиҙмәйбеҙ ҙә.

Үҙәк Башҡортостанда юрматылар ҡәүемен һәм меңдәрҙе бер тамыр, Сәсле дәрүиш — Сәсбуға исеме менән шәжәрәләргә ингән шәхес тамыры бәйләй. Әгәр меңдәрҙә Сәсбуға тамыры ҫубыйҙар ҡәүемендә булһа, Юрматы шәжәрәләрендә Сәсле дәрүиш тамыры Юрми булып теркәлеп китеүе мөмкин. Эҙләнеүҙәрҙе ошо йүнәлештә алып китеп, тағы ла өҫтәмә дәлилдәр менән был фаразды иҫбатлап буласаҡ. Ғөмүмән, Сәсбуға исеме менән майҙанға сыҡҡан мәшһүр шәхес айырым өйрәнеүгә лайыҡ, ә ошо тоҡомдоң меңдәр тарихында айырым урын алып торған ырыу бейе, Ҡәнзәфәр исеме менән шәжәрәләргә ингән шәхескә бер ни тиклем яҡын килеп өйрәнеү минең маҡсатым булды. Беҙҙең ауыл тоҡомдарының боронғо шәжәрәләре Ҡаҙанфәр ҡәүеме итеп күрһәтелә, туранан-тура уның ҡан ҡәрҙәштәре булмаһаҡ та, Иҙеүкәй үҙе бүлеп биргән тарафтарҙа тамыр йәйгән ҡырҡ мир балаһы Балҡантауын, Асылыкүлен, Димен, Ағиҙелен һөйөп йырлаған һәм үҙен һәр даим ҫубыйҙар ҡәүеме итеп минлекләгән. Бөтә тарихи документтарҙа ла был әхүәл бик асыҡ күренә. Тарихтың ҡатмарлы, киҫкен боролош ваҡыттарында ла үҙ тамырҙарына тоғро булған мең ырыуы халҡы Ҫубый улы Ҡаҙанфәр эргәһендә тупланып, нуғайҙар менән китмәйенсә, ғәзиз Ватанында төпләнеп ҡала һәм бына инде нисә быуат үҙ булмышын, телен, диалектын һаҡлап килә.